ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 март (буранай) 2026

№9 (1204)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Киләсәк гүзәл заттар ҡулында...**



4-5

**Көстәре иҫ китмәле!**



9

**Беҙ белгән Рәйсә...**



11

**"Шаршаулы булғанға халҡым ҡурсаулы тыныс торған..."**




12-13

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

**Ҡатындарҙы мөхәббәтле күрһәтәсәк нәмә матурлыҡ түгел, гүзәл холоҡтор. Күп ҡатындарҙың матурлығы камил булмаһа ла, һәр кем алдында һөйкөмлө күренә һәм хөрмәтләп телгә алына. Шуның өсөн гүзәл холоҡло һәм миһырбанлы булығыҙ. Асыулы йөҙлө булмағыҙ. Асыулы йөҙ менән бер кемгә лә күренмәгеҙ. Асыуланған ваҡытта һөйләшмәгеҙ, бигерәк тә башҡаларға яуап биреүҙән һаҡланығыҙ. Сөнки асыуланғанда яуап биреү асыуҙы көсәйтә.*

**Ризаитдин нәсихәттәренән.**

ШАҒИРҘАР ҺҮҘЕ

## НИШЛӘР ИНЕК ҺЕҘҺЕҘ...

*Һигеҙ һаны -
Ҡатын-ҡыҙҙар һыны:
Өҙөлөрҙәй нескә билдәре.
Һигеҙ - игеҙ йөрәк,
Тигеҙ тормош,
Мөхәббәт һәм сафлыҡ билдәһе.*

*Һигеҙ һаны ике тамсы һымаҡ,
Ике тамсы -
Ғүмер нигеҙе!..
Ғашиҡтарҙың никах балдағы ла
Хәтерләтеп ҡуя
Һигеҙҙе.*

*Әммә тормош гел байрамдан тормай,
Йылдың көндәре күп
Һигеҙһеҙ.
Тик, һөйөклө ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ,
Нишләр инек икән беҙ
Һеҙһеҙ!*

**Салауат ӘБҮЗӘР.**








## БАРЫ ҺЕҘ...

*Һинең наҙҙар нурлы яҙҙар кеүек
Йөрәгемде, йәнде иретә.
Был донъяла бары ҡатын-ҡыҙҙар
Беҙҙе текә баҫып йөрөтә.*

*Йөрәктәге моңдо тойомлаусы,
Яугир иткән беҙҙе ҡатын-ҡыҙ.
Йөрәк тибешенә дәрт өҫтәүсе
Наҙлы бер йән булып ҡалығыҙ.*

*Шундай оло йөрәк һеҙҙең йәндә,
Һөйөү менән тибә күкрәктә.
Ҡатын-ҡыҙҙар, йәнде өтөр ҡуҙҙар,
Дарман, өмөт бирә йөрәккә.*

*Наҙлы ҡояш төҫлө ҡараштарың,
Күгүләндәй йәнә ҡалҡамын.
Хыялыма ҡанат биргән йәнгә
Ел-дауылда аумаҫ ҡалҡанмын.*

**Фәнил БҮЛӘКОВ.**

АФАРИН!

## ӨЛГӨЛӨ ҒАИЛӘЛӘРҘЕ ТАНЫНЫҠ

**Стәрлетамаҡта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы иғлан иткән Башҡорт ғаиләһе йылын асыу һәм "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" конкурсы еңеүселәрен тәбрикләү тантанаһы үтте.**

Сарала үткән сығыштарға, һөйләшеүҙәргә туҡталып тормайынса, быйылғы "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе-2026" конкурсының финалына сығыусыларҙың исемдәрен атайыҡ. Бына улар:

Мәртәбәле бәйгенең Гран-приһына Ғафури районынан Мәрүәйевтәр ғаиләһе лайыҡ булды **(һүрәттә).**

"Ғаилә ижады" номинацияһында - Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Әбүбәкеровтар (1-се урын), Федоровка районынан Хәлиловтар (2-се), Өфөнән Байтимеровтар (3-сө) ғаиләһе;

"Ғаилә кәсебе" номинацияһында - Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Вәхитовтар (1-се урын), Ғафури районынан Фәхретдиновтар (2-се), Белорет районынан Мөсәлимовтар (3-сө) ғаиләһе;

"Ғаилә ҡиммәттәре" номинацияһында - Салауат районынан Басировтар (1-се урын), Көйөргәҙе районынан Аҡыловтар (2-се), Өфөнән Аҙнағоловтар (3-сө) ғаиләһе еңеүсе булды.

Махсус номинацияларҙа - Өфөнән Хисмәтуллиндар ("Махсус хәрби операция геройы ғаиләһе"), Бөрйән районынан Фәхрийәновтар ("Күп балалы башҡорт ғаиләһе"), Октябрьский ҡалаһынан Харасовтар ("Йәш ғаилә"), ХМАО-Юграның Сорғот ҡалаһынан Ҡунаҡҡоловтар ("Донъясыл ғаилә") ғаиләһе билдәләнде. Ҡотлайбыҙ!




12+

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# ТРОТУАРҘА ТУҠТАЛҺАҢ...

**Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә ҡала мэры Ратмир Мәүлиев тротуарҙа автомобиль ҡуйыу проблемаһына иғтибар итте. Был күренеш айырыуса түләүле парковкалар янында күҙәтелә.**

Ҡала коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Арсен Латипов билдәләүенсә, көн һайын эвакуаторҙар 30-35 еңел машинаны алып китә. Тротуарға автомобиль ҡуйыу административ хоҡуҡ боҙоу түгел, ә юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоу тип иҫәпләнгәнлектән, ҡала хеҙмәттәре водителдәргә штраф һала алмай. Бөтә мәғлүмәт Дәүләт автоинспекцияһына тапшырыла. Мәҫәлән, һуңғы ике аҙнала дәүләт автоинспекцияна 86 хоҡуҡ боҙоусы тураһында мәғлүмәт ебәрелгән.

Өфө мэры проблеманың системалы булыуын билдәләне. Ул йәйәүлеләр зонаһында парковка яһау өсөн һәүәҫкәрҙәр менән эшләү буйынса айлыҡ үткәрергә ҡушты. Инспекторҙарға водителдәргә аңлатырға, тротуарҙағы автомобилдәрҙе фотоға төшөрөргә, икенсе тапҡыр тротуарға машина ҡуйған осракта штраф һалынасағы хаҡында белдереү ҡағыҙҙары таратырға тейеш. "Бер ай иҫкәртеү өсөн эшләйәсәкбеҙ", - тине Ратмир Мәүлиев.

# ҺӘЙКӘЛ АСЫЛДЫ

**Өфөлә талантлы архитектор Маргарита Куприяноваға күптән көтөлгән һәйкәл асылды. Мэр Ратмир Мәүлиев һүҙҙәренсә, уның эшен һәм ҡалаһын яратыуы үҙенән һуң юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы.**

Һуғыштан һуңғы ауыр осорҙа, 30 йәшендә Черниковск ҡалаһының баш архитекторы булып эшләй башлаған Маргарита Николаевна биналар һәм төҙөмәгән. Ул эшен бар күңелен һалып башҡарған. Беренсе Май урамы, һигеҙ ҡатлы йорттар, уңайлы ихаталар, уйланылған төҙөлөш, Еңеү паркы - былар барыһы ла уның мираҫы.

"Был һәйкәл беҙгә ҡаланы кешеләр төҙөүе тураһында хәтерләтеп торһон, - тип яҙҙы ҡала башлығы. - Үҙенең хеҙмәте, таланты һәм Өфөгә булған һөйөүе менән ҡалабыҙҙы күркәмләндереүгә көс һалған һәр кемгә ысын күңелдән рәхмәт!".

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, был донъяла ҡатын-ҡыҙ архитекторға беренсе һәйкәл булып тора. Проект менән Башҡортостандың атҡаҙанған архитекторы Дмитрий Винкельман таныштырҙы. Һәйкәлдең эш моделен Рәсәйҙең атҡаҙанған рәссамы Хәниф Хәбибрахманов күрһәтте.

# БАТЫРЛЫҒЫН РАҪЛАП...

**Өфө мэры Ратмир Мәүлиев инженер хеҙмәте офицеры Булат Ғилмановты генерал Шайморатов ордены менән бүләкләне.**

Булат Ғилманов 2024 йылда үҙ теләге менән МХО зонаһына хеҙмәт итергә юллана. 2025 йылдың апрелендә лейтенант Ғилманов Шебекин йүнәлешендә инженер хеҙмәте начальнигы итеп тәғәйенләнә. Уның етәкселегендәге хәрбиҙәр 24 саҡрымға һуҙылған фронт һыҙығына 2 меңдән ашыу танк һәм пехотаға ҡаршы мина урынлаштыра. Ғилманов шәхсән үҙе дошман уты аҫтында 130-ҙан ашыу мина ҡуйыуға һәм дошмандың хәрби техникаға хәүеф тыуҙырған егермеләгән инженер боеприпасын юҡ итеүгә өлгәшә. Батырлығы һәм ҡыйыулығы өсөн офицер "Хеҙмәттәге ҡаҙаныштары өсөн", "Миналарҙан таҙартҡан өсөн", "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы" миҙалдары менән бүләкләнә. Хәрбиҙең ғаиләһендә Азамат исемле ике йәшлек малай үҫеп килә. Сабый атаһын бик һағына һәм уны фронт һыҙығынан ҡайтыуын түҙемһеҙлек менән көтә. Бүләкләү тантанаһында офицерҙың ҡатыны Альмира Кашапова ҡатнашты. "Минең өсөн награда - ул тормош иптәшем. Уның һаулығы. Уның өйгә ҡайтыуы. Ә был орден - уның һәр саҡ көслө, намыслы һәм лайыҡлы кеше булыуын раҫлаған бер билдә", - тип һөйләне яугир ҡатыны "Башинформ" агентлығына.

# БИНАЛАР БУШ ТОРМАЯСАҠ

**Өфөлә буш торған биналар өҫтәмә белем биреү учреждениеларына тапшырыла. Уларҙа балалар өсөн үҫеш үҙәктәре, сәнғәт мәктәптәре һәм башҡа учреждениелар асыла.**

Был хаҡта мэриялағы оператив кәңәшмәлә баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев хәбәр итте. Әлеге ваҡытта балалар үҫеше өсөн 5 үҙәк асылған һәм эшләй, тағы ла икәү бар. Мәҫәлән, тиҙҙән Комсомол урамы, 143 адресы буйынса урынлашҡан бинала балалар сәнғәт мәктәбе филиалы асыла. Бында заманса сәнғәт оҫтаханалары, тауыш яҙҙырыу студияһы, музыка һәм ижад менән шөғөлләнеү өсөн кластар барлыҡҡа киләсәк, был 300-гә яҡын йәш өфөләргә ижад менән шөғөлләнергә мөмкинлек бирәсәк. "500 квадрат метрлыҡ бина Көрәш һарайы янында ғына урынлашҡан. Объект һорау менән файҙаланыр, сөнки район тиҙ үҫә һәм бында балалар өсөн өҫтәмә белем биреү учреждениелары кәрәк, тип ышанам", - тине ҡала башлығы.

Бынан алда Телеграм-каналда Ратмир Мәүлиев Ферин урамы, 13 адресы буйынса урынлашҡан бинаның балалар сәнғәт мәктәбе итеп тапшырылыуы тураһында хәбәр иткәйне. Баш ҡаланың мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы начальнигы Айгөл Хәсәнова хәбәр итеүенсә, Өфөлә 17 лицензиялы балалар мәктәбе эшләй, шуларҙың 2-һе-художество, 10-ы - музыка мәктәбе һәм 5-е - сәнғәт мәктәбе. Уларҙа 10,5 мең самаһы бала уҡый. Уҡыусылар контингентын арттырыу өсөн сәнғәт мәктәптәре майҙанын киңәйтеү буйынса эш алып барыла.

# РӘСӘЙ ФЛАГЫ АҪТЫНДА...

**Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең баш ҡалаһында Европа асыҡ уйындары тамамланды. Йыл да үткәрелгән халыҡ-ара ярыштарҙа 30 йәштән өлкән 25 000-дән ашыу спортсы ҡатнашты.**

Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында Башҡортостандан тәжрибәле дзюдосылар сығыш яһаны. 50 йәштән өлкән спортсылар араһында Айнур Тимербаев алтын миҙалға лайыҡ булды. Өфө егеттәре Азат Зарипов (60+) һәм Рөстәм Сафиуллин (40+) көмөш миҙал яуланы. "Турнир яҡшы ойошторолған, беҙгә Рәсәй флагы аҫтында ярышта ҡатнашырға рөхсәт иттеләр. Республикаға миҙалдар алып ҡайтыуыбыҙ менән ныҡ ғорурланабыҙ", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Азат Зарипов. Уның һүҙҙәренсә, Өфөлә дзюдосы-ветерандарҙың көслө командаһы төҙөлгән. Спортсылар Көрәш һарайында шөғөлләнә. Европа асыҡ уйындарында (Open Masters Games) донъя спортсылары 38 спорт төрө буйынса ярыша.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***? Йәшерәк ҡатын-ҡыҙҙарҙы әсәйҙәр-өләсәйҙәр өлгөһөнән ситләшеүҙә ғәйепләгәндәрен йыш ишетәбеҙ бөгөн. Урынлымы икән был тәнҡит? Гүзәл заттар, ысынлап та, әсәй, өләсәйҙәрҙең матур сифаттарын мираҫ итеп алмағанмы? Үҙҙәренән һорашайыҡ!***

***Гөлиә ДАУЫТОВА, блогер:*** Был донъяла китап итеп яҙырлыҡ кешеләр була. Минең өләсәйем Ривә менән әсәйем Сәриә тап шундайҙарҙан. Өләсәйем кәрәккәндә шаян, кәрәк саҡта үсал да. Һәм ауылыбыҙҙа уны, ябай әшсе ҡатынды, тап ошо сифаттары өсөн хөрмәт итәләр, һүҙҙәренә, кәңәштәренә ҡолаҡ һалалар. Әсәйем Сәриә - ул бөтөнләй эскерһеҙ кеше. Уны ҡыҙҙырыр өсөн бик тырышырға кәрәк. Ә мин үҙем холҡом менән өләсәйемә тартҡанмын. Аллаға шөкөр, өсөбөҙ ҙә ғәйбәт таратып, кеше һөйләп йөрөй торғандарҙан түгелбеҙ. Аллаһ Тәғәлә беҙгә күңел нуры биргән, башҡалар шул нурға тартыла, һәм беҙ уның менән бүлешергә тик шатбыҙ ғына.

Бала сағымда үҙемдең кешеләргә ҡарата ҡырыҫыраҡ булғанымды иҫләйем. Шул саҡтарҙа әсәйем менән өләсәйемдең кешелеклелеге гел таң ҡалдыра торғайны. Улар икеһе лә, мәкәлдә әйтелгәнсә, башҡа берәү таш менән атһа, һәр ваҡыт аш менән яуап бирәләр.

Үҙемдең эске торошомдан сығып, минә кешене ғәфү итергә өйрәнеү бик ауыр бирелә, тип әйтер инем. Әгәр берәйһе рәнйетһә, минә уны тулыһынса ғәфү итеп, элеккесә аралашып китеүе ҡыйын. Ә әсәйем бер кемгә лә үпкә тотмай. Элегерәк уның был ғәҙәте сәйер, логикаһыҙ күренә ине хатта. Ғаиләбеҙ электән дини ҡанундар буйынса йәшәй тип әйтеп булмаһа ла, әсәйем, өләсәйем беҙҙең күңелдәрҙә иман саткыларын һүндермәҫкә тырышты, һәм тап уларҙың өлгөһөндә мин үҫә килә бар кешеләргә, бар йән эйәләренә лә йомшаҡ булырға, был донъяла бер олоно, бер кесене тыңлап йәшәргә кәрәк икәнен аңланым.

Кәрәк саҡта әсәйемдең дә, өләсәйемдең дә ҡаты була алыуҙарын, үҙҙәрен рәнйетергә бирмәүҙәрен мин яҡшы беләм. Шул уҡ ваҡытта улар икеһе лә кеше йәнлеләр, берәйһенә ярҙам кәрәк булһа, юҡты бар итеп, ҡулдарынан килгәнсә ярҙам итергә тырышалар. Икеһе лә бик ҡунаҡсыл, мул ҡуллылар. Ә мин, әлеге күҙлектән ҡарағанда, һаранырак булғанмын тип әйтер инем. Аллаға шөкөр, тормошомда шундай өлгө алырлыҡ кешеләрем булғас, кире сифаттарымды күреп, үҙгәртеп, үҙ өҫтөмдә эшләүе күпкә еңелерәк. Хәҙер үҙ теләгем менән мин дә Хоҙай биргән ризыҡ менән бүлешергә, кеше ҡайғыһына битараф булмаҫҡа тырышам. Һәм Аллаһ Тәғәлә ҡайны саҡта тап минең аша берәйһенә ярҙам итһә, бик ҡыуанам.

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы ер мөнәсәбәттәре тураһындағы законға үҙгәрештәр индерә. Уға ярашлы, ер участкаһын бушлай алырға хоҡуҡлы кешеләргә майҙансыҡты үҙаллы табыу, сиктәрен һәм кадастр номерын үҙаллы билдәләү хоҡуғы бирелә. Ерҙең ауыл йәки ҡасаба эсендә һәм шәхси йорттар төҙөү өсөн билдәләнгән зонала булыуы мотлаҡ. Дәғүәсе урындағы хакимиәткә килешеү тураһындағы ғариза тапшыра. Ыңғай ҡарар ерҙе түләүһеҙ алыу өсөн нигеҙ була.

✓Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов хәбәр итеүенсә, 2025 йылда 20 меңдән ашыу экологик сара үткән, уларҙа 4 миллион кеше ҡатнашҡан. Был эшкә мәктәп уҡыусылары, студенттар, ирекмәндәр, бизнес һәм власть органдары вәкилдәре әүҙем йәлеп ителә. Шулай уҡ республика "ЭкоТолк" халыҡ-ара экологик диктантына ҡушылған. Акцияла 2 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. "Экологик белем аҙналығы"нда 14 меңдән ашыу дәрес үткәрелгән.

✓19-20 мартта Белоруссияға күп тармаҡлы бизнес миссия ойошторола. Сара эшҡыуарҙарға үҙ продукцияһын тура тәҡдим итеү, һатыу алыусылар менән һөйләшеүҙәр үткәреү, урындағы баҙар мохтажлыҡтарын өйрәнеү мөмкинлеген бирә. "2025 йыл йомғаҡтарына ҡарағанда, Белоруссия республикабыҙҙың төп ун сауҙа партнеры араһында етенсе урында тора. Быйылғы динамика уларҙан агросәнәғәт, машина эшләү, ағас эшкәртеү продукцияһын күпләп алыуҙы күрһәтә", - тип билдәләй Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева.

✓Быйыл Салауат һәм Дыуан районларынан үткән Кропачево - Мәсегүт - Әшет трассаһында оҙонлоғо 14 километрға тиң ике участканы ремонтлау ҡаралған. Эштәр күләменә асфальт-бетон япманы яңыртыу, юл ситтәрен нығытыу, юл һыҙаттарын билдәләү инә. "Трасса республиканың мөһим юл селтәренә ҡарай. Ул Башҡортостанды Силәбе, Свердловск өлкәләре менән бәйләй. Унан Салауат районы Әлкә ауылы эргәһендәге "Салауат ере" тарихи-мемориаль комплексына барыуы уңайлы", - ти Республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓Башҡортостанда 2025 йылда 82 меңгә яҡын кеше "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" Бөтә Рәсәй физкультура-спорт комплексы нормативтарын үтәгән. Был хаҡта Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә вице-премьер - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Төбәктә бөтәһе 66 тест үҙәге эшләй. Муниципалитеттар араһында иң юғары күрһәткестәр Шишмә, Мәләүез һәм Саҡмағош районындарында.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

***Йәшерәк ҡатын-ҡыҙҙарҙы әсәйҙәр-өләсәйҙәр өлгөһөнән ситләшеүҙә ғәйепләгәндәрен йыш ишетәбеҙ бөгөн. Урынлымы икән был тәнҡит? Гүзәл заттар, ысынлап та, әсәй, өләсәйҙәрҙең матур сифаттарын мираҫ итеп алмағанмы?***

***Үҙҙәренән һорашайыҡ!***

**(Башы 3-сө биттә).**

***Земфира АБДУЛЛИНА, сит телдәр уҡытыусыһы:*** Минең Мәмфүзә өләсәйем ауылдың иң күркәм инәйҙәренең береһе булды. Оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан ҡабатлау таблицаһын яттан әйтеп ултырыр ине. Хәтере ныҡ шәп булды: мәжлестәрҙә шиғырҙар, поэмаларҙы тасуири итеп һөйләп, күптәрҙе хайран ҡалдыра ине. Бер кем тураһында бер ҡасан да яман һөйләмәне, урамда үтеп барған ауылдаштарын сәйгә саҡырып керетер, барыһын да үҙ туғанындай күрер ине. Һәм беҙҙе лә бәләкәйҙән шундай булырға өйрәтте. "Матур һүҙҙәрегеҙҙе йәлләмәгеҙ, һәр ваҡыт әйтеп тороғоҙ", - тип йыш ҡабатлар ине. Шунан алып, "Йылы һүҙ - йән аҙығы" тигәнде һәр саҡ иҫтә тотоп, кеше менән мөмкин тиклем яғымлыраҡ аралашыу минең дә ғәҙәтемә инеп ҡалды. Телдәр өйрәнеүгә булған маһирлығым да тап Мәмфүзә өләсәйемдән күскәндер, тип уйлайым.

Әле лә туғандар менән йыйылған ваҡытта өләсәйҙе һәр ваҡыт йылы хәтирәләр менән иҫкә алабыҙ, уның тәрбиәһе беҙҙең арала булған татыулыҡта ла сағыла.

Әсәйем - Динә Әхмәҙей ҡыҙы, әлбиттә, минең донъялағы иң яҡын кешем. Беҙҙең Хафизовтар затынан да, Абдуллиндар затынан да иң беренселәрҙән булып дин юлына килгән ҡатын ул. Тап ул апай-һеңлеләренә Ислам диненең матурлығын башлап күрһәтеүсе булды. Ошондай мөхиттә, өшкөрөлөп, доғалар көсөн тойоп үҫкәнгә күрә лә, артабанғы ғүмер юлымда намаҙға баҫыу - үҙем теләп килгән, мотлаҡ булырға тейеш ғәмәл ине.

Әсәйем бер кемгә лә ҡарамай, бер нимәнән ҡурҡып тормай йәшәй, мине шуның менән таң ҡалдыра ул. Мәҫәлән, тажзәхмәт осоронда финанс йәһәттән ауыр ваҡытта, ижади кеше булараҡ, тегенергә яратҡан әсәйемә ошо шөғөлдө килемле һөнәргә әйләндер, тип кәңәш бирҙем. Беренсе тапҡыр бәләкәй бизнестар өсөн конкурсҡа икәүләшеп ултырып проект яҙҙыҡ шунда. Күп тулҡынланыуҙар, шик-шөбһәләр аша үтеп, конкурста аҡсалата ярҙамға ирештек. Шулай итеп, ғүмере буйына ашнаҡсы булып хеҙмәт иткән кеше булһа ла, баҙнат итеп, 50 йәшендә үҙ эшен - ательеһын асып ебәрҙе әсәйем. Был аҙымынан һуң тормошо ҡырҡа үҙгәрҙе уның. Элек ул ауылдан сыҡмаған, балалар тип кенә, донъя көтөп кенә йәшәгән кеше булһа, хәҙер район үҙәгендә үҙ бизнесын алып барған, үҙ эшенең оҫтаһы булараҡ даны таралған ҡатын. Күптәргә 50 йәштән һуң да тормош барлығын, яратҡан эшең менән шөғөлләнеү бер ҡасан да һуң түгеллеген иҫбат итте ул.

Күҙ алдымда шундай матур өлгө булғанға күрә, минең дә үҙ эшемде - сит телдәргә өйрәтеү курстарын асҡанда ҡурҡыу тойғоһо булманы. "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән", тип халыҡ юҡҡа әйтмәгән ул. Әсәйем йәшендәге күптәр һаулыҡ, хәтер, тәжрибә һ.б. юҡлығына һылтанып, хыялдарын тормошҡа ашыра алмай ҡала. Ә ул тотто ла, ниәтләп, атҡарып та сыҡты. Һәм беҙҙе лә был тормошта ятып ҡалмаҫ өсөн хыялланыусан, ҡыйыуыраҡ, бер ни тиклем еңмешерәк, үҙ һүҙлерәк булырға кәрәк, тиеп өйрәтте. Ҡыҫҡаһы, әле минең холҡомда булған ошоларға хас күп сифаттар әсәйемдең ҡоро һүҙ һөйләп кенә түгел, ә үҙ өлгөһөндә күрһәтеүе арҡаһында формалашҡан.

***Гөлдәриә ИШДӘҮЛӘТОВА, шәфҡәт туташы:*** Төҫ-ҡиәфәтем менән тас атайым тигәндәрен йыш ишетһәм, холоҡ-фиғелем яғынан мин әсәйемә тартҡанмын. Ә әсәйем - Зарифа Ишдәүләт ҡыҙы, һүҙгә бик һаран булып күренһә лә, беҙҙе, өс ҡыҙын, тәү ҡарашҡа, үтә иркәләп үҫтермәһә лә, һәр ваҡыт ныҡ булырға өйрәтте. Йәшлек саҡтары ауыр һуғыш йылдарына тура килгән, уҡыу тәтемәгән әсәйем, беҙҙең өсөбөҙҙө лә белемле, һөнәрле итергә, аяҡҡа баҫтырырға бар көсөн һалды. "Уҡығыҙ, һөнәрле кеше бер ҡасан да юғалып ҡалмаҫ", - тейер ине.

Ошо девиз ғүмерем буйына мотив булып һуҙылған. Яңы һөнәр алырға, һәр ваҡыт нимәгәләр өйрәнергә яратам. Ғөмүмән, ауылда үҫкән балалар эш яғына әрһеҙ була. Мин дә, хәҙер инде оло йәшкә етеп барыуыма ҡарамаҫтан, ҡул ҡаушарып ултырыуҙы бер генә лә йәнем һөймәй. Әсәйем баҡса эшенә, бәйләм тотоуға маһир булды, үҙе белгәндәрҙе беҙгә лә мөмкин тиклем өйрәтергә тырышты. Шәхсән мин шул ойотҡо итеп һалынған белемдәрҙе үҙем артабан өйрәнеп, төрлө-төрлө курстар аша камиллаштырыу өҫтөндә булдым. Әйткәндәй, быуат башында тотош ил өсөн ауыр замандар еткән осорҙа тап ошо әсәйҙән күскән эшһөйәрлек, белемгә ынтылыу юғалып ҡалмаҫҡа ныҡ ярҙам итте.

Башҡа сифаттарға килгәндә, эйе, әсәйем бер ҡасан да күп һөйләп, һүҙ ҡуйыртып торманы, кешегә булған яҡшы мөнәсәбәтен ул тап эше аша сағылдыра торғайны. Өмәләргә саҡырһалар, ярҙам һорап килһәләр, һис һүҙһеҙ барыр, ярҙам итер ине. Ваҡыт үтә килә үҙемдә лә ошо сифат барлығын аңланым һәм быға бик шатмын.

Донъя көтөү маһирлығы, ыҫпайлыҡ, бөхтәлек - шулай уҡ әсәйемдән күреп үҫкән, ҡаныбыҙға һеңгән сифаттар ул. Шулай уҡ үҙ миҫалында ярҙамсыл булырға, танау сөйөп, үҙебеҙҙе башҡаларҙан өҫтөн ҡуйып йөрөмәҫкә, әммә кәрәк булһа, хәҙерге тел менән әйткәндә, үҙ сиктәребеҙҙе һаҡларға өйрәтте ул әсәйем.

**Шулай итеп, бала өсөн әсәй кеше - ҡылыҡтарын да, булған ғәҙәттәрен дә күреп, отоп ҡына торорлоҡ өлгө. Хөрмәтле гәзит уҡыусы һылыу ҡатын-ҡыҙҙарарыбыҙ, ә һеҙ әсәй-өләсәйҙәрегеҙҙән ниндәй сифаттарҙы үҙ итеп алғанһығыҙ?**

**Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# КИЛӘСӘК ГҮЗӘЛ ЗАТТАР ҠУЛЫНДА...

**Ғалим-физик, уйлап табыусы Никола Тесла - кешелек тарихындағы бөйөк шәхестәрҙең береһе. Уның асыштары XX быуатта сәнәғәт үҫешенең төп этаптарын билдәләй, кешелек донъяһын үҙгәртә. Асылда, ул - бөгөнгө XXI быуатты тыуҙырған шәхес. Электр двигателе, генератор, алмаш ток ярҙамында эшләүсе күп фазалы ҡоролмалар - Никола Тесланың даһилығы емештәре. Ә уларҙан инде заман индустрияһы, бөгөнгө электроника технологиялары үҫеп сыға.**

Үкенескә ҡаршы, даһи ғалим тураһында хәҙер бик һирәк иҫкә алалар. Уның исеме магнит яланы индукцияһы берәмеге атамаһы булараҡ һәм "Тесла" Америка компанияһы һәм ошо исем менән ул сығарған электромобилдар аша мәңгеләштерелгән. Компанияны һәм ул сығарған продукцияны юҡҡа ғына "Тесла" тип атамағандар. Никола Тесла - тәүге электромобил уйлап сығарған кеше лә ул. Ғалим 1856 йылда бөгөнгө Хорватияла тыуа. 1891 йылдан Америкала йәшәй. 1943 йылда мәрхүм була.

Никола Тесла тураһында һүҙ башлап, уның бөйөк ғалим-физик булыуҙан тыш, кешелек донъяһының киләсәге хаҡындағы ҡайһы бер фекерҙәренең, шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙға ҡағылышлыларының да үтә ҡыҙыҡлы икәнен әйтергә кәрәк. 1926 йылда ғалим "Collier's" журналына интервью бирә. Әңгәмә барышында ул кешелек йәмғиәтенең киләсәге тураһында әҙәм ышанмаҫлыҡ фараздар яһай. Нимәһе ғәжәп, тәрән, төплө һәм киң фекерләүсе ғалимдың әйткәндәренең байтағы бөгөнгө көндә - тормошҡа ашҡан ысынбарлыҡ.

"Бер-беребеҙ менән кеҫәлә йөрөткән ябай ҡоролмалар аша аралашасаҡбыҙ, һөйләшкән кешене хатта күреп торасаҡбыҙ. Күк йөҙөндә радио менән идара ителгән самолеттар үҙҙәре осоп йөрөйәсәк", - ти ул. Бер быуат элек үк ул бөгөнгө кеҫә телефоны, дрондар, пилотһыҙ осоу аппараттары тураһында әйткән килеп сыға.

Ғалим фекеренсә, киләсәктең төп үҙгәрештәре ҡатын-ҡыҙ менән бәйле буласаҡ икән. "Ҡатын-ҡыҙҙарҙың тиң хоҡуҡлылыҡ өсөн көрәше енес-ара мөнәсәбәттәрҙең төп роле гүзәл заттарға күскән яңы тәртипкә килтерәсәк. Ҡатын-ҡыҙҙар тәүҙә тиң хоҡуҡлылыҡҡа өлгәшәсәк, аҙаҡтан иһә, ир-егеттәр фиғелен ҡабатлап түгел, ә үҙ интеллекты ярҙамында өҫтөнлөккә сығасаҡ.

Ҡатын-ҡыҙ зиһене ир-егеттәр өлгәшкән барлыҡ өлкәләрҙә лә үҙен лайыҡлы күрһәтте лә инде (ғалим йәшәгән дәүер хаҡында һүҙ бара - **Ред.**). Белем кимәле буйынса гүзәл заттар тағы ла алғараҡ китер. Улар, үткәндәрҙе инҡар итеп, кешелек цивилизацияһын үҙҙәренең үҫеше менән шаҡ ҡатырыр. Тик лидерлыҡ сифаттарын, эшмәкәрлектең яңы өлкәләрен үҙләштергән һайын ҡатын-ҡыҙға хас күңел нескәлеген, әсәлек тойғоһон юғалта барыр", - тип фекерләй бөйөк ғалим.

Был үҫештең нимәгә килтереүен фаразлап, Никола Тесла иғтибарҙы бал ҡорттары ғаиләһенең эске ойошоу тәртибенә йүнәлтә: "Тереклек донъяһында идеаль ҡоролош бал ҡорттарына хас, һәм уның төп принцибы - әсәлекте илаһилыҡ менән алмаштырған үлемһеҙлек инстинкты. Инә ҡорт - бал ҡорто тормошоноң үҙәге. Ул умарта "тәхет"ен мираҫ итеп алмай, ә был бөжәк расаһының инәлеге, бала яҡтылығы булғанға ошо дәрәжәгә эйә.

Бал ҡорто умартаһының нигеҙе, таянысы - енесһеҙ эшсе ҡорттарҙың ҙур армияһы. Уларҙың берҙән-бер маҡсаты һәм бәхете булып ныҡышмалы хеҙмәт тора. Шулай уҡ умартала инә ҡорт үҙ бурыстарын үтәй алмай башлаған

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Көньяҡ Сахалинда "слалом-гигант" дисциплинаһында тау саңғыһы спорты буйынса ил кубогы үтте. Ярыштарҙың 7-се этабында илдең 19 төбәгенән 117 спортсы ҡатнашты. Белорет ҡыҙы Тәнзилә Исраилова тау саңғыһы спорты буйынса Рәсәй кубогында бронза миҙал яуланы. Был хаҡта Башҡортостан Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте.

✓Рәсәй Эске эштәр министрлығының Бөрйән районы буйынса бүлегенә мәктәп уҡытыусыһы аҡсаһын урлауҙары тураһында ғариза менән мөрәжәғәт иткән. Яҡынса мәғлүмәт буйынса, популяр мессенджерҙа уға танышынан хәбәр килгән. Һылтанма буйынса күскәндән һуң уның телефонына автоматик рәүештә зыянлы программа ингән, енәйәтселәр һиҙҙермәй генә ҡорбандың банк иҫәбенән яҡынса 40 мең һум аҡсаһын урлаған. Күпмелер ваҡыттан һуң ғына ханым үҙенең мутлашыусылар тоҙағына эләккәнен аңлап, хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт иткән.

✓"Башнефть-Розница" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында яғыулыҡтың хаҡы үҙгәргән. 22 февралдә лә хаҡтың артыуы теркәлгәйне. "Заправки" ҡушымтаһы мәғлүмәттәре буйынса, бензиндың түбәндәге маркаларына хаҡ 30 тингә артҡан: АИ-92 - 60,85 һум, АИ-95 - 64,85 һум, АИ-92 ATUM - 62,20 һум, АИ-95 ATUM - 66,10 һум. АИ-100 иһә 50 тингә ҡиммәтләнгән - 87,15 һум. "Лукойл" компанияһы АЗС-тарында ла яғыулыҡ ҡыйбат, АИ-92 бензины - 63,32 һум, АИ-95 - 68,09 һум, ә дизель яғыулығы 76,68 һум тора.

✓"Башҡортостанда беловеж зубрҙарын үрсетеү проекты Президент тәбиғәт фонды грантын алды. Бүленгән 10,2 миллион һум аҡсаға республиканың Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре дирекцияһы Белоруссиянан тағы ла 9 зубр алып ҡайтырға йыйына, - тип хәбәр итте Радий Хәбиров социаль селтәрҙә. - Хәтерегеҙгә төшөрәм, был экологик проектты 2023 йылдан бойомға ашырабыҙ. Әлеге ваҡытта унда 25 баш зубр йәшәй, шул иҫәптән 8 быҙау, улар беҙҙең республикала тыуған. 2030 йылға хайуандарҙың һанын 50 башҡа еткерергә уйлайбыҙ. Беҙ шулай итеп ил Президенты ҡуйған биологик төрлөлөктө һаҡлау буйынса мөһим дәүләт бурысын хәл итәбеҙ".

✓Башҡортостанда йәшәүселәр Минскиға тура авиарейстар менән оса ала. Был хаҡта Sputnik Беларусь мультимедиалы матбуғат-үҙәгендә Рәсәйҙең Белоруссиялағы Сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы Башҡортостан вәкиле Константин Климин һөйләне. "Яҡын арала Өфө һәм Минск араһында "Белавиа" тура рейсы асылыуы ихтимал. Был иҡтисадҡа ла, беҙҙең гуманитар мөнәсәбәттәргә лә ярҙам итер тип уйлайым", - тине Климин.



осраҡ өсөн алмашҡа тәғәйенләнгән сикләнгән һанда башҡа инәлек заттары ла йәшәй. Бер ниндәй эш башҡармаған һоро ҡорттар ҙа (шулай уҡ сикләнгән һанда) ғаилә ағзалары һанала. Уларҙың иң көслөһө инә ҡортто аталандырыу хоҡуғын ала. Ғөмүмән, бурыстарҙы теүәл бүлешеп, ойошоп йәшәү - бал ҡорттарының ғына түгел, ә, ғөмүмән, теләһә ҡайһы йәмғиәттең идеаль формаһы ул".

Йәғни бөйөк Тесла кешелектең киләсәген шулай енесһеҙ эшселәр армияһы һәм уларҙы тыуҙырған инәлек һәм аталыҡтар кастаһы рәүешендә күрә. Быны ул, кеше расаһын һаҡлап ҡалыу инстинкты шәхсәнлектән баш тартырға мәжбүр итәсәк, тип аңлата. Һәм бында ҡатын-ҡыҙҙарҙың айырым урынын билдәләй.

Шул уҡ мәлдә ул: "Бөтә Ерҙе яҡтыртылыҡҡа күмер инем. Икенсе Ҡояш булдырыу өсөн электр энергияһы етерлек ул. Шулай уҡ, позитив ментель энергия кеүек, башҡа төр энергия ла алырға мөмкин. Улар Бах йәки Моцарт музыкаһында, бөйөк шағирҙарҙың әҫәрҙәрендә бар. Ер үҙе Шатлыҡ, Тыныслыҡ һәм Мөхәббәт энергияһын үҙ эсенә ала. Улар - тупраҡтан үҫкән сәскә, беҙ ейгән ризыҡ һәм кеше өсөн "ватан" төшөнсәһенә эйә барлыҡ нәмә", - ти. Был иһә, кешелек бөгөнгө мөнәсәбәттәр нигеҙендә лә идеалға өлгәшә ала, тигән ишаралыр, тип фаразларға ҡала.

Әйткәндәй, Тесла үҙе зауыҡты яратҡан, яҡшы манераларға эйә һомғол буйлы, ҡара сәсле, зәңгәр күҙле күркәм ир була. Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙар иғтибарынан ситтә ҡалмай. Ләкин ғалим, гүзәл зат менән яҡынлыҡ ирҙәрҙең эшенә ҡамасаулай, тип ышана, бер тапҡыр ҙа өйләнмәй. "Мин никахтағы ирҙәр эшләгән бөйөк уйлап табыуҙарҙы иҫләмәйем", - тип аңлата яңғыҙлығын.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ИРАН - ВЕНЕСУЭЛА ТҮГЕЛ БИТ...

**Донъя хәлдәре бер төн эсендә баштан-аяҡҡа үҙгәреп, түңкәрелештәргә, һәләкәт-фажиғәләргә килтереүе бик тиҙ хәҙер. АҠШ, тағы ла Израиль менән берләшеп, Иранға ҡаршы бер төн эсендә һуғыш асып ебәрҙе.**

Ҡыҫҡаһы, АҠШ президенты Дональд Трамптың баҫымы аҫтында Иран үҙенең ядро программаһынан баш тартып, асылда, һөйләшеүҙәр барышында бер яҡлы сигенеүгә барырға мәжбүр булды һәм капитуляцияға бирелде, тип яҙҙы был турала Новости Рәсәй агентлығы. Ошо һөйләшеүҙәрҙән һуң бер нисә сәғәт үткәс тә, Иранға тәүге ракета килеп етте. Трамптың белдереүенсә, Штаттар менән Израиль Ирандың ядро ҡоралы инфраструктураһын ер менән тигеҙләгәнсе һуғышырға йыйына. Ә бит Иран былай ҙа ядро бомбаһы эшләп сығармаҫҡа һәм байытылған уранды үтилләштереүгә ризалығын биргәйне инде. Сәйәси күҙәтеүселәр, Тегерандың тап ана шул сигенеүгә барыуын көсһөҙлөк күрһәтеү булараҡ, уға һәләкәт килтерҙе, тип иҫәпләй. АҠШ-тың Иран менән һөйләшеүҙәр алып барыуы шаршау ролен генә үтәне, агрессорҙың һуғыш ниәте күптән уның планында ныҡынғайны инде. Өҫтәүенә, Израилдең туҡтауһыҙ һөсләтеүе лә Трамптың икеләнеүҙәрен еңде.

Шуныһы ҡот осҡос: Израиль - Америка һуғыш суҡмарҙарының Иран ҡалалары, уның хәрби объекттарына ғына түгел, граждандар инфрастуктураһына ла һөжүм итеүе һөҙөмтәһендә Минаб ҡалаһының ҡыҙ балалар уҡыған мәктәбендә 148-ләп бала һәләк булды, яралылар йөҙләгән, тип хәбәр итеүе Иран армияһы корпусының матбуғат хеҙмәтендә. Тағы бер аҙҙан Ирандың Верховный лидеры резиденцияһында агрессорҙар ракетаһы шартлауы һөҙөмтәһендә илдең сәйәси, хәрби һәм иҡтисади үҫеше йүнәлештәренә етәкселек итеүсе аятолла Али Хаменеиҙың да һәләк булыуы хаҡында хәбәр килеп етте. Иранда 40 көнлөк матәм иғлан ителде һәм Имам Реза мәсетенең көмбәҙе башына ҡара ҡайғы әләме эленде. Ислам Республикаһы президенты Масуд Пезешкиан белдереүенсә, Хаменеиҙың үлеме яуапһыҙ ҡалмаясаҡ. Дональд Трамп иһә, әгәр ҙә Иран яуап утын туҡтатмаһа, быға тиклем күрелмәгән һөжүм утына дусар ителәсәк, тип янауын белдерә.

Агрессорҙар яғынан теләһә ҡасан һәм теләһә ниндәй оятһыҙ провокация ихтималлығын көтөп йәшәгән Ирандың армияһы - Ислам революцияһының һаҡ корпусы (КСИР) - шулай ҙа юғалып ҡалманы, тәүге көн Яҡын Көнсығыштағы америка хәрби базаларына ракеталар һәм пилотһыҙ осоусы шартлатҡыстар менән яуап уты асты. Иҫәптә тотолған сәптәр араһында Яҡын Көнсығыштағы ғәрәп - ислам илдәрен оккупациялаған америка хәрби базаларында, шул иҫәптән, Берләшкән Ғәрәп Әмираттарының баш ҡалаһы Абу-Даби менән административ үҙәге Дубайҙа, Бахрейн короллегендә, Иорданияла, Катарҙа һәм Кувейттағы базаларҙа көслө шартлауҙар яңғыраны. Ирандың һөжүм маҡсатына ингән объекттар иҫәбендә 20-ләгән америка хәрби базаһы, Тель-Ноф авиабазаһы (Израиль Ҡораллы көстәре), Израиль армияһы командалығының штаб-квартираһы һәм Израилдең Хаккариялағы эре оборона-сәнәғәт комплексы ла бар ине.

Бынан тыш, Иран донъя нефте һәм газ ташыуҙа стратегик коридор булған Ормуз боғаҙын япты. Иран армияһы, әҙемтәләрҙән һәм янауҙарҙан ҡурҡып тормайынса, верховный аятолла Али Хоменеиҙың үлеменә яуап итеп, үс алырға һәм ҡаты һөжүм операцияһы алып барырға вәғәҙәләй. Милли телевидение аша "Ҡанэскес дошмандар һәм баҫҡынсылар шуны белеп ҡуйһын: ил өҫтөнә килгән һәләкәттәр халҡыбыҙ өсөн ни тиклем генә ауыр булмаһын, улар беҙҙе тағы ла көслөрәк һәм тәүәккәлерәк итәсәк", - тигән белдереү таратылды. Иран аятоллаһы Макарем Ширази АҠШ менән Израилгә ҡаршы джиһад (изге һуғыш) иғлан итте. Эксперт Александр Перенджиев әйтеүенсә, джиһад дәүләттәр араһындағы һуғыш ҡына түгел, ул Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) әләме аҫтында иғлан ителә һәм дини яу башланыуын аңлата. Был иһә конфликттың киң күләмдә йәйелеүенә килтереүе ихтимал.

Яҡын Көнсығыш илдәре икеләнеү сатында тороп ҡалды: утҡа ут менән яуап бирергәме, әллә дошманлашыусы яҡтарҙы килештерергә тырышырғамы? Яҡын Көнсығыш институтының дипломатик хеҙмәткәре Алан Эйр яҙып сығыуынса, әгәр АҠШ-ҡа Венесуэлала бер кешене урлап алып китеп тә һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин булһа, Иран менән был "номер" барып сыҡмаясаҡ. Был былтырғы Иран - Израиль бәрелешенән дә асыҡ күренде: Израиль Ирандың бөтөн тип әйтерлек юғары хәрби етәкселәрен юҡ итеүгә ҡарамаҫтан, Иран бөгөлөп төшмәне, яңыларын тәғәйенләй торҙо. Әле иһә, Пентагон сығанаҡтары буйынса тәүлек эсендә Ирандың 40-лаған чиновнигы һәләк булған. Ил менән кем етәкселек итәсәк? Әлегә президент, армия корпусының яңы етәксеһе һәм суд системаһы вәкиле төп етәкселек өсмөйөшөн тәшкил итә. Киләһе верховный аятолланы 88 дин әһеле араһынан эксперт советы һайлаясаҡ, ләкин Трамптың был йәһәттән "үҙ кандидатураһы"н тәҡдим итергә лә хатта намыҫы етте. Иран был тәҡдимде ҡабул итеү сигенә барып етмәҫ, моғайын.

Америка Конгресында Трампты һуғыш уты тоҡандырыусы, көс ҡулланыусы тип атанылар һәм Иранға һөжүмде, конституцияны боҙоп, Конгресс ризалығынан тыш башлауҙа ғәйепләйҙәр. Прогрессив донъя йәмәғәтселеге кисекмәҫтән БМО-ның Хәүефһеҙлек Советы ултырышын йыйырға саҡырып мөрәжәғәт итте. РФ Президенты Владимир Путин Ирандағы хәл айҡанлы Рәсәй Хәүефһеҙлек советы ултырышын үткәрҙе һәм Иранға ҡарата АҠШ - Израиль агрессияһын туҡтатырға һәм конфликтты көйләргә саҡырҙы, Рәсәйҙең был йәһәттән булышлыҡ итергә әҙер булыуын белдерҙе. Юғиһә, Рәсәйҙең БМО-лағы даими вәкиле Василий Небензя фаразлауынса, Иранға ҡарата агрессияның был төбәктә генә түгел, унан ситтә лә көсөргәнешле хәл килтереп тыуҙырыуы, ә артабан конфликттың гуманитар-иҡтисади һәләкәткә әйләнеп китеүе лә ихтимал.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Куйбышев тимер юлы етәксеһе Вячеслав Дмитриев хәбәр итеүенсә, быйыл Өфө - Һамар электричкаһын йөрөтөү буйынса эш башларға уйлайҙар. Бының өсөн хәрәкәт составын яңыртырға һәм станцияларҙы төҙөкләндерергә кәрәк. Куйбышев тимер юлы идаралығы әле Рәсәйҙең дүрт төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда эшләй, уның 332 станцияһы бар. Тимер юлы инновация эшмәкәрлегендә алдынғы урын биләй, йөк һәм пассажирҙар ташыу өлкәһендә ҙур проекттарҙы тормошҡа ашыра.

✓Йәштәр туризмы үҙәге "Геройҙарса Өфө" экскурсияһы әҙерләгән. Ул Өфө дәүләт нефть техник университетының Йәштәр туризмы үҙәге төҙөгән "Өфө - хеҙмәт батырлығы ҡалаһы" маршрутының дауамы булып тора. Яңы тематик маршрут ҡала һәм республика халҡының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ҡаһарманлығы, Өфөнөң дөйөм Еңеүгә индергән өлөшө - фронтовик-геройҙар, тыл эшсәндәре, хәрби формированиелар һәм һуғышта дан ҡаҙанған шәхестәр яҙмышы хаҡында.

✓Башҡортостандың Адаптив спорт үҙәге тәрбиәләнеүселәре Белоруссияла үткән парайөҙөү буйынса халыҡ-ара ярыштарҙа Рәсәй йыйылма командаһы өсөн уңышлы сығыш яһаны. Был хаҡта БР вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Богдан Мозговой - биш награда (2 алтын, 2 көмөш, 1 бронза), Эмиль Сәлимгәрәев - дүрт (2 алтын, 2 көмөш), ә Аделина Мозговая бер көмөш миҙал яулаған.

✓Башҡортостандың ике спортсыһы биатлон буйынса Рәсәй кубогының финал этабында призлы урын яуланы. Был хаҡта республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә Хөкүмәт вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов белдерҙе. Биатлон буйынса Рәсәй кубогы Златоуст ҡалаһында уҙҙы. Эдуард Латипов ир-егеттәр араһында масс-стартта көмөш призер булды, ә Антон Бабиков финишҡа өсөнсө булып килде.

✓Өфөнөң Әғзәм Фәйзуллин исемендәге 39-сы гимназияһы уҡыусыһы Реана Кинйәбулатова шахмат буйынса Рәсәй беренселегендә көмөш миҙалға лайыҡ булды. Был хаҡта Ленин районы башлығы Олег Котов хәбәр итте. Шахмат композицияларын сисеү буйынса беренселек Сочиҙа үтте. Турнирҙа илебеҙҙең 9-19 йәшлек иң көслө шахматсылары ҡатнашты. 9 йәшлек шахматсылар араһында Реана Кинйәбулатова көмөш призер булды. Йәш шахматсы Өфөнөң "Толпар" клубында Рәсәй гроссмейстеры Урал Хәсәновта шөғөлләнә. Реана - Грузияла балалары араһында шахмат буйынса Донъя кубогы еңеүсеһе.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Сәләмәтлек сихәте

Бал ҡорто донъяһы, умартасылыҡ, бал, прополис, инә ҡорт һөтө, һитә, ҡорт ағыуы менән дауаланыу тураһында китаптарҙан, матбуғат баҫмаларынан киң мәғлүмәт алырға була. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа Башҡортостан ҡортсолоҡ белгестәренең бик күп хеҙмәттәре китап булып баҫылып сыҡты: В.Н.Власов, "Башҡорт бал ҡорто - тәбиғәттең ҡиммәтле хазинаһы"; Е.М.Петров, "Башҡортостандың урман умартасылығы сығанаҡтары тураһында"; Д.Т.Шакиров, "Умартасылыҡ"; Ә.М.Ишемғолов, "Умартасылыҡты үҫтереү өсөн Башҡортостандың биологик ресурстары"; Н.И.Кривцов, А.П.Савин, Ә.М.Ишемғолов, "Рәсәйҙең үҙәк регионының һәм Көньяҡ Уралдың бал биреүсе үсемлектәре белешмәһе"... Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшереү үҙәге белгестәре иһә "Башҡорт бал ҡорто тоҡомон сығарыу методикаһы", "Бал ҡорто ҡустәрен комплекслы файҙаланыу", "Ҡортсолоҡ ниғмәттәре нигеҙендә туҡланыу азыҡтары һәм косметик саралар етештереү технологияһы" кеүек йыйынтыҡтар нәшер итте.

Владимир Солухин яҙғанса, бал - эхлаҡи категория, алтын, көмөш, алмас, гәрәбә, роза майы һымаҡ мәңгелек ҡиммәттәр менән бергә, бал да мәңгелек һәм ныҡлыҡ ҡиммәте эталоны. Ер йөҙөндә бал ҡорто гәҙәттән тыш һирәк, үҙенә башҡа булған һымаҡ, бал да шулай.

## Прополис

Башҡорттар бик боронғо замандарҙа ук ағас ҡыуыштарынан бал алыу, солоҡ соҡоп эшләп, бал ҡорттары аҫрау менән шөғөлләнгән, шифалы кәрәҙле бал менән туҡланған. Солоҡсолоҡ ҡанбабаларҙың ғәҙәти шөғөлө булған. Һәр хужа солоғона үҙ тамғаһын ҡуйған. Урмандарҙы ҡырҡыуҙың көсәйеүе, ер эшкәртеүҙең киңәйеүе, тәбиғи мөхиттең үҙгәреүе һөҙөмтәһендә Көньяҡ Урал тәбиғәте торошона яраҡлашҡан ҡырағай бал ҡорттары юғала, солоҡ түмәр умарта, рамлы умарта менән алмашына, ҡортсолоҡ хужалыҡ тармағы рәүешле үҫеш ала. Хәҙерге ваҡытта солоҡ ҡорто Бөрйән төйәгендә, Шүлгәнташ ҡурсаулығында һәм урманлы-таулы башҡа төбәктәрҙә һаҡланып ҡалған.

Башҡорт иленең хайуандар, үсемлектәр донъяһы өйрәнеүсе XVIII быуат тарихсыһы Петр Рычков: "... Бал ҡорто шөғөлө йәнһәтенән башҡорттарҙы уҙып киткән берәй халыҡ бармы икән?" - тип яҙған. Башҡорт балының даны бөтә донъяға таралған. Әйткәндәй, XX быуаттың алтмышынсы йылдарында Башҡортостан ауыл хужалығының йәмәғәт һәм шәхси тармаҡтарында 400-440 мең күс булған. Алдынғы умартасылар унай килгән йылдарҙа һәр оянан етмеш-йөҙ килограмм бал алған. Йәмәғәт умартасылыҡтарында йыл һайын уртаса 1,5-2 мең тонна, 1957 йылда иһә 3 мең тонна тауар балы йыйылған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, илдә иктисади хәлдең үҙгәреүе, экологик хәлдең киҫкенләшеүе, йүнселлектең етмәүе арҡаһында республикабыҙҙа күстәр һаны, бал етештереү нык ҡына кәмене. 2005 йылда Башҡортостанда бөтәһе 278 меңдән ашыу күс-оя булыу ихтималлығы күҙалланды. Халыҡ әйтмешләй, әлбиттә, "бал, бал" тиеү менән генә ауыҙ тәмләнмәй, бал ҡортонон балы бар, балға тиклем наҙы бар. Ҡортсолоҡтоң киләсәге хаҡында ҡайғыртырға бурыслы кәрәҙештәр ошо наҙҙан баҙап ҡалмаҫҡа тейеш. Сөнки умартасылыҡ ризыҡтарына ихтыяж ҙур. Башҡорт балы Америка, Франция, Италия, Германия, Япония кеүек сит илдәрҙә лә данлы.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-8-се һандарҙа).**

ЙЫЛ ТЕМАҺЫ

# ТАМЫРҘАРҘЫ БАРЛАП...



**1 мартта Башҡорт ғаиләһе көнө билдәләнде. Ошо уңайҙан баш ҡаланың "Аҡбуҙат" башҡорт балалар баҡсаһында Ғаилә фестивале үтте.**

Башҡорттар борон-борондан ғаилә йолаларын хөрмәт итә, етенсе быуынға тиклем нәҫел тамырҙарын барларға тырыша. Ғаилә ҡороу, ырыуҙы дауам итеү, ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау, уларҙы балаларға ла тапшырыу - халҡыбыҙҙың төп йәшәү мәғәнәһе. Беҙ ҙә балалар баҡсаһында ойошторолған төрлө саралар аша кескәйҙәргә ғаилә һәм уның ҡиммәттәре, туғанлыҡ ептәре тураһында аңлатырға, туған телгә, Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләргә тырышабыҙ. Сираттағы сара Башҡорт ғаиләһе көнөнә арналып, "Башҡорт ғаиләһе фестивале" тип аталды.

Сарала өс - Мәзитовтар, Күсәрбаевтар, Мостафиндар ғаиләләре ҡатнашты һәм һәр береһе бәйге шарттарын еренә еткереп үтәргә тырышты. Ә шулай ҙа Луиза менән Фидан Мәзитовтар ғаиләһе айырылып торҙо. Улар дүрт бала тәрбиәләй. Күп балалы ғаилә башлығы Фидан Мәзитов ландшафт дизайнеры буларак үҙ эшен аҫҡан, әлеге ваҡытта уға ҡатыны Луиза ла ярҙам итә. Өлкән улдары Ибраһим, Мөхәмәткәрим һәм берҙән-бер ҡыҙҙары Сара, Дим районының Б. Бикбай исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһында белем ала. Иң кесе улдары Мираҫ 75-се "Аҡбуҙат" башҡорт балалар баҡсаһының тәрбиәләнеүсеһе. Сара әсәһе менән бейергә ярата, бейеү түңәрәгенә йөрөйҙәр, төрлө конкурстарҙа ҡатнашалар, ә малайҙар спортты үҙ итәләр. Улар өсөһө лә "Сармат" футбол командаһында шөғөлләнә.

Мәзитовтар ғаиләһе туған йәнле, ярҙамсыл, ауыр саҡта яҡындарына кәңәшсе, терәк. Уларҙың ғаиләһен яратмаған, хөрмәт итмәгән кеше юк. Шуға күрә тыуған йорттарынан ҡунаҡ өҙөлмәй, дуҫ-иштәре, туғандары менән аралашып, ҡатнашып йәшәйҙәр, туғанлыҡ ептәрен өҙмәйҙәр. Луиза һәм Фидан Мәзитовтар ғаиләһе милли йолаларыбыҙҙы һаҡларға ынтыла, төрлө йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. "Дүрт балабыҙ - дүрт таянысыбыҙ, шатлығыбыҙ. Уларһыҙ тормошобоҙҙо күҙ алдына ла килтереп булмай", - ти улар.

Мәртәбәле ҡунаҡтар - филология фәндәре докторы, профессор, М.Аҡмулла исемендәге университеттың башҡорт филологияһы факультеты деканы Ләйлә Хөсәйенова, "Аҡбуҙат" балалар журналының баш мөхәррире Лариса Абдуллина, Милли белем биреү ресурсы үҙәге директоры Ләйсән Аҙнабаева, "Аҡ тирмә" милли мәҙәни үҙәге ағзаһы Гөлнара Килдеголовапарҙың ҡатнашыуы ла байрамыбыҙға йәм өҫтәне. Улар "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы етәкселегенә, тәрбиәселәргә һәм атай-әсәйҙәргә Башҡорт ғаиләһе көнө уңайынан матур байрам үткәреүҙәре өсөн оло рәхмәттәрен еткерҙе.

**Илүзә ХӘЗИӘХМӘТОВА,**
**75-се "Аҡбуҙат" башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.**

ТАНЫНЫҢМЫ?

# ИР ҺӘМ ҠАТЫН



Йәшәгән, ти, ҡәп-ҡәҙимге Ир менән Ҡатын. Ире көн дә эштән ҡайтып, телевизор ҡабыҙған, гәзит уҡырға ултырған. Ҡатыны ашарға әҙерләгән. Ашарға ултырғас, бисәһе көндәгесә ирен игәгән: "Өйҙә бер тин ярҙамың юк, эш хаҡың түбән, осто-оҫҡа ялғап йәшәйбеҙ". Ҡатынының мыжыуына күптән күнегеп бөткән ире бер ни өндәшмәгән, эстән генә уйлай торған булған: "Үҙең шамтыр Мәскәй әбей, өйләнгән саҡта һинән дә сибәр ҡыҙ юк ине".

Бер көн ҡатыны ҡый-ғыпырҙы сығарып түгергә ҡушҡас, ире теләмәй генә урамға сыҡҡан. Ҡайтып килешләй, өй ишеге алдына туҡтап, Хоҙайға ялбарған:

- Эй, Аллам, тормошомдоң бер йәме юк. Ғүмер буйы шул мыжыҡ, йәмһеҙ бисә менән йәшәрмен микән? Был бит йәшәү түгел, ыҙа сигеү.

Ҡайҙандыр, ирҙең ҡолағына ғына, Аллаһ Тәғәләнең тауышы ишетелгән:

- Был бәләндән ҡотҡарып, һиңә йәш, сибәр ҡыҙҙы йәрәштерергә була. Әммә күршеләрең яҙмышындағы был үҙгәрешкә ышанмайынса шаҡ ҡатасаҡ. Әйҙә, былай итәйек: әлеге ҡатыныңды йәлап ҡына фәрештәгә әйләндерәм, уның тышҡы ҡиәфәтен дә, эске торошон дә үҙгәртәм, тик һин дә уға торошло булып үҙгәрергә тейешһең.

- Рәхмәт, Аллам. Фәрештә хаҡына бөтөн ирҙәр ҙә үҙ яҙмышын үҙгәртергә риза булыр ине. Тик, зинһар өсөн әйтә һал, минең ҡатыным ҡасан фәрештәгә әйләнер?

- Мин уны хәҙерҙән үк әйләп ҡына үҙгәртә башлайым. Һәр минут һайын ул шулай яҡшы яҡҡа үҙгәрә барыр.

Ир өйөнә ҡайтҡан, диванға һуҙылып ятып, телевизор ҡабыҙған. Тик зәңгәр экрандағы тапшырыуҙарҙың береһе лә күңеленә хуш килмәй икән. Ул тиҙерәк ҡатынындағы үҙгәрештәрҙе күргеһе килгән.

Ахырҙа ул, урынынан тороп, кухня яғына килгән, ишек яҡтауына һөйәлеп, ситтән генә ҡатынын күҙәтә башлаған. Һауыт-һаба йыуып торған хәләл ефете иренең ҡарашын һиҙеп, әйләнеп ҡараған.

Уларҙың ҡараштары осрашҡан. "Юк, әлегә бер ниндәй үҙгәреш тә һиҙелмәй", - тип һығымта яһаған ир кеше.

Тормош иптәшенең сәйер ҡарашына иҫе киткән ҡатын, үҙе лә һиҙмәҫтән, сәстәрен төҙәткән, сикәләре ҡыҙарған.

- Һин ниңә улай миңә тишә яҙырҙай итеп ҡарайһың? - тип һораған ул оялып ҡына.

Ир ҙә ҡаушай төшкән.

- Әйҙә, ярҙам итешәйем, - тигән ул, ахырҙа, үҙ ҡолағына үҙе ышанмай.

- Рәхмәт, кәрәкмәй. Мин йыуып бөтөп барам инде, - тигән ҡатыны уңайһыҙланып ҡына.

"Быны һиңә, мә! Ҡатыным күҙ менән ҡаш араһында үҙгәрә башланы түгелме?" - тип уйлаған ире һәм ҡатынына ярҙам итә башлаған.

Икенсе көндө ир кеше өйгә ашығып ҡайтҡан. Ҡатынындағы үҙгәрештәрҙе тиҙерәк күргеһе килгән уның.

"Тукта, әгәр ҙә ҡатыным, ысынлап та, фәрештәгә әйләнһә, унайһыҙ булыр", - тип уйлап, ул юл ыңғайы сәскәләр гөлләмәһе һатып алған.

Өй ишеген асыу менән ир, сихырланғандай, ҡатып ҡалған. Уның алдына байрамса кейенгән ҡатыны йылмайып баҫҡан. Йәш саҡтағылай тулҡынланыу менән ир сәскәләрҙе ҡатынына һуҙған.

Ҡатын, ҡапыл ҡыҙарып, керпектәрен елпелдәтеп, сәскәләрҙе алған, күҙҙәрендә йәшлек саҡҡылары балҡып киткән.

"Фәрештә! Ҡалай тиҙ үҙгәргән! Керпектәре былай-алаймы! Фәрештәләр генә шулай баҫалҡы булалыр. Тыштан да, эстән дә бер юлы үҙгәргән дә баһа!" - тип аптыраған ир. Байрамса әҙерләнгән һый тулы өҫтәлде күргәс, ул бөтөнләй шаҡ ҡатҡан.

Өҫтәл артына ултырғас, ҡатыны ҡапыл һикереп торған:

- Ғәфү ит, телевизор тоҡандырырға онотҡанмын, бына, яңы гәзиттәр ҙә һатып алғайным.

- Юҡ, телевизор ҡарағым килмәй, гәзиттәрҙе аҙаҡ ҡарап сығырмын, уларҙа барыбер көн дә бер үк балыҡ башын сәйнәйҙәр. Иртәгә, шәмбе көнөнә, ниндәй пландарың бар? Бына, театрға ике билет алғайным. Тәүҙә көндеҙ театрға барыр өсөн һиңә күлдәк һатып алырбыҙ, йәме? - ир "фәрештәләргә торошло күлдәк", тип әйтергә уйлаған да, ҡатынының наҙлы ҡарашын күреп, шымып ҡалған.

"Эй, Аллам! Фәрештәләр был тиклем дә гүзәл була икән! Әгәр ҙә ҡатыным күҙгә күренеп үҙгәрһә, мин уға лайыҡлы ир була алырмынмы һуң?" - тип ҡурҡа төшкән ир. Һәм ҡапыл, йәшен атҡандай, мейеһен яңы уй телеп үткән: "Фәрештә эргәмдә саҡта, һуң булмаҫ элек, унан һәм минән тыуасаҡ бала тураһында һорай һалырға кәрәк!"

- Ниңә уйға баттың? Әллә берәй әйтер һүҙең бармы? - тип һораған ҡатын.

- Әлләсе... Мөмкин булһа... Эйе, ысынлап та, минең йөрәк түрендә, һиңә әйтер һүҙем бар... Гүзәл фәрештәм, мин һинән һәм минән тыуасаҡ бала тураһында хыялланам!

Ҡатыны ире янына килгән. Һөйөү наҙы менән тулған күҙҙәренән тамған күҙ йәштәре алһыу сикәләре буйлап ағып төшкән. Бер көн эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәргән ҡатын неска ҡулдарын иренең яурынына һалған...

"Ниндәй илерткес төн булды! Фәрештә эргәһендә әүлиәгә әйләнерлек!" - тип уйлаған ир кеше икенсе көн иртәнсәк ейәнсәрен балалар баҡсаһына алып барған саҡта.

**Исмәгзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**



Тауҙар араһында һәм тау йылғалары яҙғарында таралып ятҡан ауылдарҙа йәшәгән кешеләр менең күҙәтеүҙәремдең һәм тикшеренеүҙәремдең предметы булды ла инде. Тикшеренеүҙәр районына ингән ауылдар: Уҫманғәле, Сәфәрғол, Нуҡат, Яны Хәсән, Сермән, Йөйәк, Манышты, Ҡороҡүләк, Көмбә, Бирҙеғол, Ташлы, Аранғол, Аис һәм Иҫке Хәсән. Был ауылдарҙың барыһы ла ошонда 100 мең дисәтинә ере булған С.И. фон-Дервиз биләмәләренән әллә ни йыраҡ түгел.

Урман башҡорттары ауылдары урынлашҡан ерҙәрҙе дала башҡорттарынықы менән сағыштырһаң, тәүгеләренә өҫтөнлөк бирәһең. Урман башҡорттарының ауылдары (күбеһенсә ҙурҙарҙан түгел - бер нисә тиҫтә йорттан тора), ғәҙәттә, бер яҡтан бик матур ылыҫлы урман ҡаплаған тау менән ышыҡланһа, икенсе яҡтан йылға менән сикләнә, йә иһә улар тау битләүҙәренә һырыҡҡан була. Ауылдарҙың урамдары киң. Ауыл уртаһында ҙур булмаған мәсет тора. Ыҙмалар ҡарағай йә иһә ҡайын бүрәнәләренән һалынған, тәпәш кенәләр, дранка йә иһә ҡабыҡ менән ябылғандар, ә ҡайһы берҙәренең ҡыйығы ла юҡ, уның урынына өй башына үлән баҫып бөткән ер түшәлгән. Һәр өй янында кәртә, ситән, ҡайһы берҙә нәҙек ағас олондары менән уратып алынған бәләкәй генә ихата бар; ҡайһы берҙәренең өйҙәре артында мал-тыуар өсөн ҡаралтылар, келәттәр һ.б. бар.

Йыш ҡына ыҙмаға тура урамдан инеп була. Соландан 2 йәки 2,5 аршин бейеклегендәге бәләкәй ишектән өйгә инәләр. Ҡышҡы биналар үҙҙәренең эске төҙөлөшө буйынса дала башҡорттарыныҡынан әллә ни айырылмай. Стеналары юнып сутланған; бүрәнәләр араһына йоҡа ғына мүк ҡатламы һалып ҡалдырылған. Иҙәндәре һәм түшәмдәре таҡтанан яһалған, әммә насар беркетелгән, шуға күрә түбә таҡталары араһынан ер ҡойолоп тора.

Иҙән өрләктәр һәм яндауырҙар өҫтөнә түшәлә. Йәйләүгә сыҡҡанда башҡорттар иҙәндең бер нисә таҡтаһын асып ҡуя. Был иҙән аҫтын (баҙҙы) еләтеү өсөн эшләнә шикелле, санитария күҙлегенән ҡарағанда, был мөһим. Икенсе берәүҙәр әйтеүенсә, был өйҙәгеләрҙең барыһының да йәйләүгә китеүен белгертеү өсөн эшләнә.

Өйҙәрҙә яҡтылыҡ етерлек кимәлдә түгел, был тәҙрәләр һаны һәм уларҙың ҙурлығы менән бәйле. Ғәҙәттә, бер йә ике тәҙрә урам, бер бәләкәй тәҙрә ихата яғынан ҡуйыла. Тәҙрәләрҙең бейеклеге 12 - 16 ҡарыштан артмай, киңлеге 8 - 12 ҡарыш тирәһе. Рамдарға быяла ҡуйыла, ә ҡыштарын ҡарындыҡ тартыла һәм, унан башҡа, рустарҙағы кеүек тәҙрә ҡапҡастары ла осрай, ә дала башҡорттарында улар булмай. Ыҙманың яртыһынан күберәк өлөшөн ҡәҙимге һике (урындыҡ) биләй, уның өҫтөнә мендәрҙәр, балаҫтар һәм башҡа нәмәләр өйөп ҡуйыла. Ҡайһы саҡта һикеләр араһында буш урын ҡалдырыла, унда өҫтәл ҡуйыла, башҡорттар шунда туҡлана. Урал башҡорттарының ризыҡтарын өҫтәлгә ҡуйып ашағандарын бер саҡта ла осратҡаным булманы, улар эскәтер йәйелгән иҙәндә йә иһә урындыҡта ризыҡлана. Һике өҫтөнән күлдәк, кейем-һалым эленә торған бау тарттырып ҡуйыла, ҡатын-ҡыҙҙар яғы шаршау менән ҡапланған.

Мөйөштә, ишек янында, балсыҡ менән һыланған ябай сыуал тора; уның менән йәнәш мейескә ашарға бешереү һәм кер йыуыу өсөн ҡаҙан беркетелгән. Керҙе унан аҙ ғына алдараҡ аҙыҡ бешерелгән бер үк ҡаҙанда йыуыу башҡорттар тормошонда ҡәҙимге бер күренеш, тип һанала, сөнки улар йәшәгән мөхиттең үтә ярлы, бигерәк тә кухня һауыт-һабаһының бик аҙ булыуын иҫәпкә алырға кәрәк. Ҡайһы бер ыҙмаларҙа рус мейестәре лә осрай, әммә улар һәйбәтләп уйлап һалынмаған. Сыуал янында бәләкәй хайуандарҙы: кәзә бәрәстәрен, быҙауҙарҙы һәм башҡаларҙы ҡыш айҙарында ыҙмала тотоу урыны кәртәләп алынған. Ыҙмала кеше һәм малдар күбәйеп киткән хәлдә ундағы һауаның ниндәйерәк булыуын күҙ алдына килтереү ауыр түгел.

Ҡайһы бер урындарҙа файҙаланырлыҡ ер участкалары булыуына ҡарамаҫтан, башҡорттар ер эшкәртеү менән шөғөлләнмәй тиерлек. Уларҙың төп һөнәре - урман кәсебе, уның менән йыл әйләнәһенә тиерлек шөғөлләнәләр. Ирҙәр генә түгел, балалар һәм хатта ҡатын-ҡыҙҙар ҙа эшләй. Ҡыштарын улар берәй урман промышленнигына ялланып бүрәнә һәм утын әҙерләй, йә иһә һатыу өсөн үҙҙәренең биләмәләрендә ағас киҫә. Унан башҡа, бәғзе берәүҙәре пристандарға ағас ташыу менән шөғөлләнә.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 3-8-се һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



**Сергей РУДЕНКО**

## БАШҠОРТТАР

### Башҡорттарҙың ризығы

Башҡорттарҙың ризығы тураһындағы беренсе мәғлүмәттәр бик наҡыҫ һәм улар бары тик һуңғы ике йөҙ ярым йылға ҡарай. Билдәләп китеүебеҙсә, "Ҙур һыҙма китабы"нда (XVII быуаттың беренсе яртыһы) уларҙың аҙыҡтары "бал, йәнлек һәм балыҡ" булыуы бәйән ителә. Был сығанаҡ һөт ризыҡтары тураһында иҫкә алмай, шуға ҡарамаҫтан, улар башҡорттарҙа, малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе халыҡ булараҡ, ҙур әһәмиәткә эйә булған. 1725 - 1726 йылдарҙа Юхнев йыйған мәғлүмәттәргә ярашлы, Себер даруғаһы башҡорттары "икмәк ашамайҙар, ит кенә ашайҙар һәм бейә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ эсәләр"; шулай уҡ Нуғай даруғаһы башҡорттары ла "йылҡы итен ашай һәм ҡымыҙ эсә, уларҙа шулай уҡ бал да бар"; ә Ҡаҙан даруғаһы башҡорттары "икмәк һәм йылҡы ите ашай". Уса даруғаһының төньяҡ башҡорттарында икмәк был ваҡытта төп туҡланыу ризығы булып торған.

Башҡорттарҙың ризығы тураһында ентекле мәғлүмәттәрҙе XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы сәйәхәтселәр ҡалдырған. И. И. Лепехиндың һүҙҙәренсә, йәйгеһен башҡорттар, нигеҙҙә, һөт менән туҡланған. "Уларҙың (башҡорттарҙың) юлға алған ризығы ҙур булмаған киҫәк сырҙан һәм бер турһыҡ ҡымыҙҙан тора. Шуның менән улар туҡ һәм күңелле йөрөгән". П.С. Паллас шулай уҡ башҡорттарҙың төп аҙығы һөт ризыҡтарынан һәм иттән тороуын, ә инде икмәкте көн һайын ашамауҙарын билдәләгән. Пермь башҡорттары тураһында уҙған быуаттың башындағы автор Н. С. Попов, улар "иттән тыш өлөшләтә икмәк тә ашай; йәйгеһен ҡымыҙ эсәләр, ә ҡышҡыһын бейә һөтөнән бал һәм ирень (моғайын, айрандыр) ҡоялар", тип яҙа.

Башҡорттарҙың хужалыҡ көнкүреше үҙгәреүе менән уларҙың ризыҡ итеп ҡулланған аҙыҡ-түлеге лә үҙгәрә, ит урынына улар икмәкте күберәк ашай башлай.

Ҡырағай үҫемлектәр - балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, ҡымыҙ (малочай), ҡырҡөпшә, ҡуян ҡолаҡ, сабыртҡан һ.б. үләндәр башҡорттар тарафынан йыш ҡулланылһа ла, үҫемлек ризыҡтары башҡорттарҙың туҡланыуында һәр ваҡыт икенсе урында тора. Бик күп ризыҡтарға тәмләткес рәүешендә улар йыуа һәм ялан һуғаны, урман йыуаһын файҙаланған. Бигерәк тә янтраҡ йәки һарына ризыҡ өсөн күпләп йыйылған һәм файҙаланылған.

XX быуатҡа тиклем башҡорттар баҡсасылыҡ менән бик һирәк шөғөлләнгән. Баҡсалары булғандары ла унда бары тик бәрәңге генә ултыртҡан һәм бары тик уны ғына ризыҡ итеп файҙаланған. Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайышында уҙған быуат һуңында башҡорттар башҡа йәшелсә-емеш тә ултырта башлаған, әммә улар бәрәңге кеүек үк башҡорттарҙың туҡланыу ризыҡтары араһында икенсе урында торған һәм шуға ла запасҡа тупланмаған.

Башҡорттар бер ниндәй төр бөшмәк тә ашамаған, еләктән инде ер еләген, ҡайын еләген, ҡурай еләген, ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағат, тал бөрлөгәне, бөрлөгән, сейә һәм муйыл йыйған. Еләкте улар сей килеш тә, ҡаҡ эшләп тә ашаған; киптерелгән муйыл менән сейәне тирмәндән үткәреп, бәлеш эслеге итеп файҙаланғандар.

**(Дауамы бар).**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# СУҠЫНДЫРЫУ СӘЙӘСӘТЕН...

## башҡорттар ҡабул итмәгән

### Дүртенсе осор



XVIII быуаттың 80-се йылдарына батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы дини сәйәсәтенең һуңғы осоро башлана, ул 1861 йылға тиклем дауам итә. Ошо осорҙа хөкүмәт, ислам диненә ҡарата мөнәсәбәтен ҡырҡа үҙгәртеп, 1789 йылдың декабрь башында Өфөлә Ырымбур мосолман Диниә назаратын асып, мосолман руханиҙарының эшмәкәрлеген законлаштыра.

Дини сәйәсәттең былай үҙгәреүенә эске һәм тышҡы факторҙар ҙа йоғонто яһай. Йәғни башҡорт һәм мишәрҙәрҙең хәрби казачий сословиеға күсеп, батша хөкүмәтенең эске (каратель) һәм тышҡы (баҫып алыу) сәйәсәтен әүҙем үткәреүсегә әйләнеүе. Түрәләренең хәрби һәм граждандар чиновниктары булып китеүе, XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы рус-төрөк һуғыштары илдәге дини сәйәсәттең үҙгәреүендә үҙ ролен уйнай. Екатерина II хөкүмәте Төркиәнең Рәсәй мосолмандарына дини һәм сәйәси йоғонтоһон юҡҡа сығарырға ынтыла. Уның ирекле дин тотоу тураһында указ сығарыуы һәм Өфөлә Диниә назаратын асыуы күрше ҡаҙаҡ халҡын Рәсәйгә ылыҡтырыу маҡсатында эшләнә. Ирекле дин тотоу тураһында указ сыҡҡас, яңы мәсеттәр төҙөлә, улар эргәһендә мәҙрәсәләр асыла. Батша хөкүмәтенең бер нисә баҫҡыс итеп ҡайта-ҡайта үткәрелгән дини сәйәсәте башҡорттарҙың ҡаты ҡаршылығына осрай. Суҡындырыуҙы улар үҙҙәренең рухи донъяһынан яҙыу тип аңлай. Башҡорттарҙың ҡоралды көрәше уларҙың динен генә түгел, телен дә, мәҙәниәтен дә, халыҡ булараҡ үҙаллылығын да һаҡлап алып ҡалырға ярҙам итә.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**(Аҙағы. Башы 4-8-се һандарҙа).**

***✓ Шиғырымды йәки йырымды, прозамды уҡыусыға, тыңлаусыға бары тик һөйләп биреү сығанағы тип кенә күргем килмәй, мин уларҙың "йөрәк тибешен" уятыусы булыуын теләйем.***

*СЕРЛЕ ЛӘ УЛАР!*

**Алёна Абдразаҡова - беҙҙең мәҙәни донъябыҙға тәрән, киң, етди, сағыу ижады менән талпынып килеп инде. Ышаныслы һәм тәүәккәл аҙымдар менән. Бөгөн уның тураһында: талантлы милләттәшебеҙ, тигән маҡтау һүҙҙәрен йыш ишетергә тура килә. Эйе, халҡыбыҙҙың рухын сағылдырған, данлы үткәнебеҙгә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләгән яҙмалары, видеолары аша Алёна заман менән ҡыйыу диалог ҡора, ижад донъяһына үҙенең күңеленән тере тамсылар бөркә һәм беҙҙең йөрәктәргә ғәм һәм сәм өҫтәй. Ул башҡорт, рус, инглиз телдәрендә ижад итә. Юлдар ҡайҙа ғына илтһә лә, илһамлы ижад башланғысы Башҡортостан менән бәйле - Мәскәүҙә йәшәүсе шағирә, прозаик был турала һәр саҡ ғорурлыҡ менән әйтә.**

# "МИНЕҢ КӨСӨМ - ДӨРЛӘП ЯНҒАН ЙӨРӘК-КҮҢЕЛ!"

**Алёна, күптәр өсөн һин, ысын мәғәнәһендә, асыш булдың. Ләкин ижадҡа килеү юлың һаман сер булып ҡала. Ул, гүйә, вуаль артына йәшерелгән. Шуға ла, "Кем һин, Алёна?" тигән һорауҙы күптәр бирергә теләй. Ҙур ижадҡа ынтылыш ҡасан башланды?**

- Минең әҙәбиәткә һөйөү бик бөләкәй саҡтан килә. Әсәйемдең беҙҙе, ике кескенә ҡыҙын, һәр кис әкиәт-хикәйәт һөйләп, мөғжизә илендә йөрөтөп, шулай бәүелтеп-тирбәтеп, йоҡоға талдырғаны һәр саҡ хәтеремдә. Шуға ла, уйынсыҡ-тәтәйгә ҡарағанда, күберәк китап ятатып үҫтек, 5 йәштә уҡый-яҙа ла белә инек, өйөбөҙ тулы китап булды, шөкөр.

Тәүге шиғырҙарымды һәм хикәйәләремде Стәрлетамаҡтағы 1-се гимназияның гәзитендә баҫтырып сығарғайным. Ул гәзитте нисек итеп тулҡынланып ҡулыма алғаным бөгөнгөләй хәтеремдә! Шиғыр, хикәйәләрем аша уйҙарымды, хистәремде башҡа кешеләргә еткерә алдым бит. Был шөғөлдөң нисек мөһим икәнен шунда асыҡ аңланым. Ул ваҡытта минең күңелемдә рус поэзияһының "Көмөш быуат" шағирҙары тәрән яңғыраш алды. Башҡорт теле буйынса уҙғарылған олимпиадаларҙа ла йыл һайын ҡатнашып, призлы урындар яулап килдем.

Әммә ысын тормошто аңлау һуңыраҡ, гимназияны тамамлап, 16 ғына йәшемдә өйҙән алыҫҡа уҡырға киткәс кенә килде. Шунда миндә "Ҡан хәтере - ҡаҡшамаҫ көс" тигән илаһи бер аңлау барлыҡҡа килде. Студент саҡта бер шәлкем шиғырҙарымды "Йәшлек" гәзитендә баҫтырып сығарыуҙа Башҡортостандың халыҡ шағиры Хәсән Назар булышлыҡ итте, абруйлы әҙип минең күп кенә шиғырҙарымды уҡып сыҡҡас: "Һиңә, һеңлем, Мәскәүҙәге Юғары әҙәби уҡыу йортона уҡырға китергә кәрәк", - тине. Матур рецензия яҙып бирҙе. Әлбиттә, Хәсән ағайҙың ышанысы, миңә биргән баһаһы ҡанаттарымды нығытып ебәрҙе. Ул ваҡыттарҙа беҙ, 90-сы йылдар балалары - юҡлыҡты татыған быуын - тормошта матди байлыҡты мөһим тип уйлай инек, шуға ла: "Юҡ, тормошта артта ҡалмаҫ өсөн миңә тәүҙә һөнәр алырға кәрәк", - тип яуапланым. Ул мәлдә мин юридик факультетта уҡып йөрөй инем.

**Ҡайһы жанр күңелгә яҡын: шиғриәтме, прозамы? Әллә йыр сәнғәте нығыраҡ илһамландырамы?**

- Минең өсөн һәр жанр - үҙенсәлекле ҡорал. Мәҫәлән, Мәскәүҙә Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр факультетында уҡығанда ҡытай теле мине образдар менән фекерләргә өйрәтте. Шиғриәт - ул хистәрҙең иң юғары нөктәһе булһа, проза фекерҙең психологик тәрәнлеген асырға ярҙам итә. Йыр сәнғәте иһә - һүҙҙең музыка аша йөрәккә, күңел ҡылында уйнап, тура юл табыуы. Мин үҙемде бер жанр менән генә сикләмәйем, сөнки һәр идеяның үҙ яңғырашы бар.

**Салауатҡа арналған эпик видеоң күптәрҙе тетрәндерҙе. Уны яҙырға мәжбүр иткән сәбәптәрҙе белге килә. Йөрәктә уйылырлыҡ һүҙҙәр ҡайҙан тыуҙы? Салауат тематикаһы нимә ул һинең өсөн?**

- Был әҫәрҙең донъяға килеүе осраҡлы ғына түгел, Хоҙайҙан килгән бер ҡөҙрәттер, тип ҡабул итәм. Беҙ, башҡорттар, ирек һөйөүсән халыҡ, ерҙәребеҙ ҙә киң. Киңлекте яратҡанғалыр... Уйлаһаң, ирек һөйгән өсөн нисә быуат, нимә генә кисермәгән халҡым, нимә генә үтмәгән уның башынан... Ил-ояның туҙҙырылып, утта янғанын нисек кенә онотаһың инде? Ағиҙел буйындағы Салауат батырҙың һәйкәле янына барғанда мин ҙур бер тулҡынланыу кисерәм, әйтерһең, минең йәнем шул үткән быуаттарға барып тоташа. Һәйкәл тирәләй йөрөйөм, ә үҙем, гүйә, халҡымдың үткәндәрен урап сығам, яу юлдары буйлап уҙам, хатта ҡыҙған тимер менән Салауаттың маңлайына һуҡҡан тамғаһын күргәндәй булам. Унан һуң, Стәрлебаш районы Яңы Ҡалҡаш ауылында йәшәгән ҡартатайым Баязитов Фәтҡулланың миңә: "Беҙ Ҡаранай батыр тоҡомо", - тип һөйләгәне хәтеремдә. Ҡаранай Моратовтың батырлығы Салауат Юлаевтың ҡаһарманлығына тиң булған, шуға ла был тема минең өсөн бик шәхси һәм яҡын.

Салауат тематикаһы минең өсөн йәнә лә ирекҡә ынтылған ир-ат ҡеүәте һәм замандан көслөрәк булған тамырҙарға тоғролоҡ сағылышы. Шуныһы ғәжәп: "Минең көсөм - дөрләп янған йөрәк-күңел!" - тигән юлдарҙы яҙғанда мин батырҙар рухының үҙе телгә килгәнен тойҙом. Бөгөнгө һынаулы заманда был йыр кешеләргә ныҡлыҡ, көс һәм яҡты өмөт бирергә тейештер, тип аңлайым. Салауат батыр башҡортомдоң мәңгелек юйылмаҫ хәтере булып ҡалыуына инанам.



**"Реквием на снегу". Салауаттың эске кисерештәрен ышандырырлыҡ итеп биреүең, шул заман тәрәнлегенә үтеп инә алыуың хайран итә. Реквиемдың дауамы буласаҡмы?**

- "Реквием" өҫтөндә эшләгәндә мин мөмкин булмағанды эшләргә - ваҡыт аша үтеп, шул ҡырыҫ заманды эстән тойомларға ынтылдым. Салауатты барып етмәҫлек легенда итеп түгел, аҡыл-күңел һынауҙары аша үткән, хистәре сигенә тиклем сағылған тере кеше итеп күреү минең өсөн бик мөһим ине.

Реквиемдың дауамы мотлаҡ буласаҡ. Хәҙерге ваҡытта мин тарихи архивтарға һәм документтарға тәрән үтеп инеү өҫтөндәмен. Салауаттың тормошо тураһындағы мәғлүмәттәрҙе бөртөкләп йыйып, киләсәктә ҙур күләмле әҫәр ижад итергә ниәтләйем. Минең хыялым һәм маҡсатым - был хеҙмәтем Салауат батырыбыҙ тураһындағы өр-яңы, заманса тулы метражлы фильмдың нигеҙе булһын ине. Беҙгә батырыбыҙҙың образын тарихи дөрөҫлөктә һәм рух ҡеүәтен һаҡлап, бөгөнгө тамашасыға яҡын һәм аңлайышлы итеп кино аша тәрән яҡтыртыу кәрәк.

**Фәлсәфәүи уйланыуҙарың бөтә кешеләргә аңлашыламы? Һин уларҙы яҙған саҡта бары күңелеңде бушатаһыңмы, әллә уҡыусы нимә тип әйтер, тигән уй алға сығамы?**

- Ижадтың иң юғары мәлендә мин үткәндәрҙең рухы, тарих һәм үҙ-үҙем менән һөйләшәм. Был ваҡытта уҡыусы тураһында уйламайым, ижад стихия булып үҙе килеп инә. Әммә шторм, ҡойон тымғас, мин башҡа кешегә илткән күпер тураһында уйлай башлайым. Уҡыусыға аңлатыу түгел, ә ул үҙе аҙым яһап кисерерлек арауыҡ булдырыу мөһим.

**Нисә телдә ижад итәһең?**

- Мин башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә ижад итәм - был өс тел минең уй-фекерҙәремдең һәм хистәремдәге төп ҡанаттарым. Бынан тыш, мин тағы ла немец, француз һәм ҡытай телдәрен беләм. Мәктәпте тамамлағанда уҡ өс сит ил телен бер аҙ үҙләштергәйнем инде - француз, немец, инглиз телдәрен. Һәр тел - айырым бер ғаләм. Башҡорт теле - тамырҙарым теле, унда ата-бабалар хәтере. Бик тә яратам әсәм телен. Рус теле лә бер аҙ киңлек бирә, мин уны Рәсәй теле тип ҡабул итәм, башҡа милләт кешеләре менән аралашыу өсөн байытылған тел. Ә ҡытай теле - образлылыҡ. Телдәр араһындағы күсештәр миңә донъяны төрлө яҡлап күрергә мөмкинлек бирә.

**Тормоштағы иң ҙур маҡсатыңды әйтә алаһыңмы?**

- Минең маҡсатым - "күперҙәр" төҙөү. Телдәр, мәҙәниәттәр, үткән менән бөгөнгө араһында. Шиғырымды йәки йырымды, прозамды уҡыусыға, тыңлаусыға бары тик һөйләп биреү сығанағы тип кенә күргем килмәй, мин уларҙың "йөрәк тибешен" уятыусы булыуын теләйем. Әгәр һүҙем кеше йөрәгендә резонанс тыуҙыра икән - тимәк, мин үҙ бурысымды үтәйем.

**Һин ижадсы һәм ҡатын-ҡыҙ. Ошо ике төрлө бурыс тийәйекме, яуаплылыҡмы, вазифамы, нисегерәк яраша ала һиндә? Улар бер-берееһенә ҡамасауламаймы?**

- Бер нисек тә ҡамасауламай, киреһенсә, көсәйтә! Ҡатын - ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы була, береһе һүнһә, икенсеһе ҡабына. Оло мәғәнә бар был халыҡ аҡылында. Ауыр саҡта бөгөлөп төшкәндә лә яҡшыға өмөтөңдө һүрелтмәҫкә өйрәтә был аҡыл. Ҡатын-ҡыҙ вазифаһы ижадта һиҙгерлек һәм түҙемлек, ғәҙәти булмағанды күреү сифаттарын нығыта. Әгәр ижад һәм ҡатын-ҡыҙ вазифаһы бер-береһенә ҡамасаулаһа, донъя бик күп матур әйберҙәрҙән - нәфис күлдәктәрҙән алып, гениаль шиғырҙарға тиклем - мәхрүм булыр ине.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

*ИРЕКМӘН ДӘ УЛАР!*

# ДҮРТ ЙӨҘҘӘН АШТЫ

**Мәләүез районында Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һалдаттарға ярҙам күрһәтмәгән бер генә ауыл да юҡ. Һәр кем ҡулынан килгәнде эшләргә, ил именлеген һаҡлаған ир-егеттәрҙе хәстәрләүгә үҙ өлөшөн индерергә тырыша. Был йәһәттән яҡташтарыбыҙ әүҙем һәм берҙәм.**



Махсус хәрби операция башланған көндәрҙән алып Смаҡ ағинәйҙәре ир-егеттәргә ойоҡбаш, бейәләй бәйләп, күстәнәс туплап ебәрә.

***✓ Мусаны, халыҡ дошманы тип, ҡулға алалар, Фатиханы балалары менән бергә йәшәгән йорттан ҡыуалар. Уны ҡыҙҙары менән бергә Пермь урмандарына урман ҡырҡырға ебәрәләр.***

*АҒИНӘЙ ҘӘ УЛАР!*

**Ошолай аталған сараға Көсөк-Маяҡ ауылы ағинәйҙәре күрше Килмәк, Ғәлиәхмәр, Мәçкәү, Сораман, Уральский ауылдары ағинәйҙәрен йыйҙы. "Сарабыҙ Рәсәй халыҡтарының берҙәмлегенә, Татыу һәм ҙур ғаилә йылына арналып, бөгөн ҡатын-ҡыҙҙы данлайбыҙ, сөнки ҙур ғаилә ҡатын-ҡыҙҙан башлана. Шулай уҡ батыр яҡташыбыҙ Мортазин Муса Лут улының тыуыуына 135 йыл айҡанлы, уларҙың ғаиләһе тураһында ла иҫкә алырбыҙ. Ойошмабыҙҙың бер йоҙроҡҡа ойошоп эш алып барыуына ла 10 йыл булып китте, күршеләрҙе ҡыҫҡаса эшебеҙ һөҙөмтәләре менән дә таныштырырбыҙ",- тип сараның маҡсатын аңлатты ауылдың төп ағинәйе Гөлсирә Ғаҡил ҡыҙы.**



# КӨСТӘРЕ ИҪ КИТМӘЛЕ!

Хакимиәт башлығы Айҙар Исламов Көсөк-Маяҡ ауылы ағинәйҙәренә оло хөрмәтен Рәхмәт хаттары аша еткерҙе һәм улар башҡарған эштәрҙе - ил һағына киткән уландарҙы бөтә йолаһын йолалап оҙатыу, хөрмәтләп ҡаршы алыу, "Үлемһеҙ полк" акцияһы үткәреү, МХО-лағы ир-егеттәребеҙгә гуманитар ярҙам ойоштороу кеүек сараларҙы билдәләп үтте. Ысынында, был ауылда ла ағинәйҙәр эшләмәгән эш юҡтыр ҙа инде ул. Айҙар Мөхтәр улы юҡҡа ғына уларҙы ауылдың төп таянысы, тип атамағандыр.

Артабан сараның төп өлөшөнә - ауылдың, райондың данлыҡлы ҡатын-ҡыҙҙары тураһындағы хәтирәләргә күсеп, тәүге һүҙ ауыл музейы етәксеһенә бирелде. Уның сығышы Муса Лут улы Мортазиндың тоғро тормош юлдашы Фатихаға арналғайны. Фатиха Яңы Байрамғол ауылында етеш-бай йәшәгән Маликовтарҙың ҡыҙы була. Тырыш, һәләтле ҡыҙ Үрге Яйыҡ ҡалаһында уҡып белем ала, ғәрәп, рус, француз телдәрен өйрәнеп белә. 26 йәшлек Мусаның белемле һылыуҡайға күҙе төшә. Әммә атай кеше ҡыҙын уға бирергә риза булмай. 19 йәшлек Фатиханы Муса урлап ала. Шулай бер-береһенә тартылған ике йәш кеше ҡауыша, бәхетле ғүмер кисереүҙәренә өмөтләнә.

Ғаилә Мәскәүгә күсеп килгәс, Фатиха ла әүҙем тормош уртаһында ҡайнай. Офицер ҡатындарын йыйып, ҡатын-ҡыҙҙар советы ойоштора. Тәмле ризыҡтар бешереү, бәйләү, сигеү кеүек ҡул эштәрен өйрәнәләр. Ҡатмарлы заман менән бәйле тәүге ярҙам күрһәтеү, яраны бәйләү алымдарын да үҙләштерәләр. Фатиха Мусаның, ысын мәғәнәһендә, уң ҡулы була. Архивтарҙа ултырып, кәрәкле мәғлүмәттәрҙе өйрәнеп, уның китаптарын яҙыу һәм баҫтырып сығарыуҙа ла өлөшө ҙур була уның. Ошо арала алты балаға ғүмер ҙә бирәләр. Килешеп, бәхетле генә йәшәгән бер мәлдә, тормош селпәрәмә килә. Мусаны, халыҡ дошманы тип, ҡулға алалар, Фатиханы балалары менән бергә йәшәгән йорттан ҡыуалар. Уны ҡыҙҙары менән бергә Пермь урмандарына урман ҡырҡырға ебәрәләр. Был ваҡытҡа бер йәшлек Асҡар, үпкәһе шешеп, үлеп ҡалған була. Пермдә Ынйыҡайы ла үлеп ҡуя. Зөбәржәт, Шәүрә, Нәйлә, Ләйлә исемле ҡыҙҙары үҫә. Фатиха ғүмеренең ахырына, 75 йәшенә тиклем, Магнит ҡалаһында йәшәй, шунда ерләнгән...

"Ағинәй" ойошмаһының әүҙем ағзаһы Рәйлә Сәғит ҡыҙы ҙур бер ғорурлыҡ менән үҙенең оло ҡәйнәһе тураһында һөйләне. Рәйлә килен булып төшкәндә, һуғыш афәтенең бар ауырлығын кисергән ҡәйнәһенә 78 йәш була. "22 июнде бөгөнгөләй хәтерләйем, - тип әйтер ине ҡәйнәм. - Баҫыуҙа утау эштәре менән булған саҡта бригадир килеп һуғыш сығыуын хәбәр итә. Ирен һуғышҡа алалар. Ҡәйнәм дүрт бала менән тороп ҡала. Ирҙәрҙе генә түгел, аттарҙы ла алып китеп бөтәләр. Был осорҙа бар эш ҡатын-ҡыҙ иңенә тороп ҡала. Күп тә үтмәй, иренән "ҡара ҡағыҙ" ҙа килә. Был ғаиләнән киткән дүрт уландың барыһы ла яуҙа ятып ҡала. Үҙенең дүрт балаһын тәрбиәләп үҫтерергә көс таба оло ҡәйнәм.1994 йылда 80 йәшендә лә әле ике һыйыр һауҙы, майын, ҡоротон, башҡаһын ҡышҡылыҡҡа эш итеп, балаларына, туған-тыумасаларына әҙерләп ултырыр ине. 1996 йылда мәңгелек йортона күсте. Хәтәр замандың бар ауырлығын күтәреп йәшәгән оло ҡәйнәм ошо йәшенә тиклем мал ҡарап, һөтөн эш итеп йәшәргә ҡайҙан көс алды икән, тип ғәжәпләнеп тә, һоҡланып та һөйләргә генә ҡалды".

Артабан һүҙ иң гүзәл һөнәр эйәһе, 37 йыл балаларға белем биреүсе, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы Тәғзимә Ғаяз ҡыҙы Шәкирйәнова тураһында булды. Ишмөхәмәт Нурмөхәмәт улы менән 52 йыл татыу йәшәйҙәр, 4 ул тәрбиәләп үҫтерәләр. Хеҙмәт кенәгәһендә бер генә яҙыуы бар. Тыуған ергә, тыуған ауылға һөйөү тәрбиәһе ғаиләлә шул дәрәжәлә булғандыр: дүрт улы ла ошо ауылда ғаилә ҡороп, йорт һалған. 13 ейән-ейәнсәрле, 5 бүләле апайыбыҙ ауыл тормошонда әле лә әүҙем ҡайнап йәшәй, ауылдың абруйлы ағинәйе.

Әлеге мәлдә күп бала тәрбиәләгән, татыу ғаиләләр ҙә иҫкә алынды. "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнеүсе ике ғаилә менән дә Көсөк-Маяҡтар бик ғорурлана. Шулай уҡ уларҙың ҙур ғорурлығы, 1 тапҡыр донъя чемпионы, 6 тапҡыр Рәсәй чемпионы, 5 тапҡыр Башҡортостан чемпионы исемдәренә лайыҡ булыусы Нәзимә ханым үҙе саҡырылғайны сараға. Ул - ҡышҡы һыуыҡ һыуҙа йөҙөүсе. Үҙе һөйләүе буйынса, йәштән спорт менән шөғөлләнә. Тәүҙә саңғыла йөрөү, йүгереү уның яратҡан шөғөлө була. Учалы ҡалаһында саңғысылар клубында шөғөлләнә башлағас, клуб етәксеһе Әхмәҙей Әхмәҙейә улы менән таныша. Бер аҙҙан өйләнешәләр, матур ғүмер кисерәләр. Ире ҡапыл вафат булғас, инде 60-ын тултырған Нәзимә тәүҙә албырғап ҡала. Шул саҡта үҙен ҡулға алып, табиптар ризалыҡ бирмәһә лә, ҡабаттан саңғыға баҫа. Ҡалала морждар клубы асылғас, тәүәккәлләп, шунда килә. Морждар клубының быуаһы уны Енесей, Волга, Амур йылғаларына, Байкал, Онега күлдәренә, Ҡыҙыл, Һары диңгеҙҙәргә алып сыға. Мәскәү, Яр Саллы, Воронеж, Тольятти ҡалаларында үткән Рәсәй чемпионаты Канадаға, Италияға, Ҡытайға тиклем алып барып еткерә. "Боҙло һыуҙа ҡойоноуҙың рәхәтлеген һөйләп кенә аңлатырлыҡ түгел", ти Нәзимә Хажғәле ҡыҙы. Аҙнаһына бер нисә тапҡыр әле лә Учалы быуаһының боҙло һыуына ҡойонорға йөрөүҙе дауам итә...

Артабан Көсөк-Маяҡтар тағы бер яратҡан килендәре Әлиә Мәслимова тураһында һөйләне. Әлиә менән дә ғорурланырлыҡ шул. Ете бала әсәһе Әлиә - ҡурҡыу белмәҫ йөрәкле йәш ҡатын. Ошондай ҡатмарлы заманда үҙ машинаһында МХО-ға гуманитар ярҙам ташый ул. 2023 йылдың декабрь айында беренсе тапҡыр батырсылыҡ итеп юлға сыға, ут һүндергестәр, тепловизор, төҙөлөш өсөн кәрәкле көрәк, балта кеүек әйберҙәр тейәп ала. Инде ун тапҡыр иҫән-һау ғына барып ҡайтҡан ул шул яҡтарға. Ире, бер туған ағаһы әлеге мәлдә МХО-ла. Ете бала әсәһе бына шулай ил сигендәгеләргә ярҙам ташый. Балаларының да һәр яҡлап һәләттәрен үҫтереүгә көс һәм ваҡыт табырға тырыша, төрлө түңәрәктәргә йөрөтә. Малайҙары - буласаҡ хоккейсылар. Йәмәғәт эшенең уртаһында ла ҡайнай: ауыл советы депутаты, ауылдағы ҡатын-ҡыҙҙар футбол клубының капитаны ла. "Ғаиләлә 4 ир баланан һуң тыуған ҡыҙмын, шуға күрә ир балаларға хас булғанса, йоҙроғомдо төйнәп, күҙ йәшемде сығармай, малайҙарса холоҡ менән үҫкәнмендер", - тип ҡуя ул.

Башта улар аҙна һайын ауылдан ҡалаға килеп, махсус цехта һаҡ селтәре үрҙе. Һуңынан шундай уҡ цехты үҙҙәрендә булдырҙы.

- Башта беҙ Мәләүезгә барып селтәр үреүсе ирекмәндәргә ярҙамлашып йөрөнөк. Шул уҡ эште үҙебеҙҙә башларға ниәт итеп, ауыл биләмәһе башлығы Айрат Шәйәхмәтовҡа мөрәжәғәт иттек. Етәксенән ыңғай яуап алғас, уны үреү өсөн махсус ҡалып яһатып алып, мәҙәниәт йортонда эш башлап ебәрҙек. Был эшкә дан өсөн түгел, ил именлеген һаҡлағандарға ысын күңелдән ярҙам итеү теләге менән тотондоҡ. Шул ваҡыттан алып 450-гә яҡын селтәр үрелгән, госпиталь өсөн 1000-дән ашыу мендәр тултырып оҙатылған, ҡойолған окоп шәме, бешерелгән милли ризыҡ, яҙылған хат, яһалған бетеү һаны ла байтаҡ. Байрамдарҙа һалдаттарыбыҙ өсөн бүләк әҙерләйбеҙ. Ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан хәрбиҙәр менән осрашып, табын артында һөйләшеп ултырыу, әсәйҙәрсә арҡаларынан тупылдатып һөйөп ҡаршы алып, изге теләк менән оҙатып ҡалыу уларға өмөт һәм ышаныс өҫтәй, күңелен йылыта, - тип һөйләй ағинәйҙәр.

Районда беренселәрҙән булып ирекмәнлек эшенә тотонған инәй-апайҙар һәр аҙнаның дүшәмбе һәм шаршамбы көндәрендә ямғыр тимәй, ҡар тимәй, ваҡыт табып, һаҡ селтәре үрергә йөрөй. Ауыл халҡы ла Махсус хәрби операция башланған көндән алып яугирҙарҙы үҙ ярҙамынан ташламай, хәрбиҙәргә кәрәк-яраҡ йыйып, посылкалар әҙерләп тапшырып тора. Яугирҙарға ебәрер өсөн әҙерләнгән гуманитар ярҙамға үҙ еребеҙҙә үҫкән шифалы үләндәр, өй туҡмасы, сәк-сәк, бал, кейем-һалым, дарыу һәм башҡа кәрәк-яраҡ туплана. Изге ғәмәлгә, ситтә йәшәһәләр ҙә, ауылда уҙған сараларҙа әүҙем ҡатнашып, матди яҡтан ярҙам күрһәткән яҡташтары ла ҙур теләк менән ҡушыла.

- Уҡыған доғалар, күмәкләп теләгән теләктәребеҙ уландарҙы мәкерле ниәттән ҡотҡарһын, үргән селтәрҙәребеҙ балаҡайҙарҙың ғүмерен һаҡлаһын, - ти инәй-апайҙар.

Улар араһында Махсус хәрби операцияла ғәзиз балаһын юғалтҡандар ҙа, зарығып улдарын көткәндәр ҙә бар. Әсәләрҙең барыһына ла рух ныҡлығы насип итһен. Смаҡтар эшләгән эше, ҡылған изге ғәмәле менән Еңеүгә үҙ өлөшөн индерергә, ил һағындағыларға көс-ҡеүәт бирергә тырыша. Уларҙың күҙ нурын, доғаһын ҡушып үргән селтәрҙәре яу ҡырындағы һалдаттарға һаҡ булһын, тип теләйек. Ир-егеттәр имен-аман өйҙәренә әйләнеп ҡайтһын!

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Беҙ үҙебеҙҙең затлы, рухлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ менән таныштырҙыҡ. Мостай Кәрим әҫәрендәгесә, донъя бына шундай көслө ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ тирәләй әйләнә. Донъя тотҡаһы ла - улар. Ҡәҙимге тормошта әллә ни күҙгә ташланмайҙар ҙа. Әммә, ваҡыты-ваҡыты менән улар тураһында һөйләп, иҫкә алып, башҡаларға өлгө итеп күрһәтеп торорға бик тә кәрәктер тип ойошторҙоҡ ошо сараны. Илебеҙгә тыныслыҡ, халҡыбыҙға һаулыҡ, һәр ғаиләгә бәхетле матур тормош насип булһын, иҫән-һау ғына еңеүҙе ҡаршыларға яҙһын", - тип сараны йомғаҡланы Көсөк-Маяҡ ағинәйҙәре.**

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,
Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

ЗАУЫҠ

# ҺАҠСЫ ФӘРЕШТӘЛӘР ЯРҘАМЫНДА...

Фирүзә АБДУЛЛИНА.



### Һаҡсы фәрештәләр

Ир-егеттәр киткәс яу ҡырына,
Ил сигенә баҫҡас батырҙар,
Ҡорос ҡалҡан булып күтәрелде
Һаҡсы фәрештәләр - ҡатындар!

Һәр бер һалдат өсөн янып-көйөп,
Һәр бер яралыны ҡайғыртып,
Һаҡсы фәрештәләр баш осонда,
Ярҙам ҡанаттарын ҡалҡытып.

Тыуған яҡтан сәләм килеп торғас,
Индә ҡанат тоя батырҙар,
Һаҡсы фәрештәләр ярҙамында
Дошмандарҙы еңеп ҡайтырҙар.

Ҡатын-ҡыҙҙар, һаҡсы фәрештәләр,
Һалдат ғүмерҙәре һағында,
Рәхмәт һеҙгә, рәхмәт, фәрештәләр,
Рәхмәт һеҙгә тағын - тағын да...

### Әсәйҙәрҙе рәнйетмәгеҙ...

Әсәйҙәрҙе рәнйетмәгеҙ,
Түктермәгеҙ күҙ йәшен,
Йөрәгенә көс һалмағыҙ,
Салландырмағыҙ сәсен.

Әсәй кеше кисерер ул,
Теләр бары изгелек,
Яуаптан ҡурҡ! Яза бирер
Аллаһ бар бит иң элек!

Юҡтан бар иткән әсәйгә
Бурысыбыҙ мәңгелек.
- Һәр кем өсөн иң ҙур кеше -
Әсәй! - ти бар кешелек.

Әсәйҙәрҙе рәнйетмәгеҙ,
Онотмағыҙ: асылда
Ожмах та бит әсәйҙәрҙең
Аяғының аҫтында.

### Ваҡытында әйтелгән һүҙ

Юл сатында тороп ҡалып,
Аяҡ аҫтың булғанда боҙ,
Аҙашыуҙан, абыныуҙан
Һаҡлап ҡала бары бер һүҙ -
Ваҡытында әйтелгән һүҙ.

Икеләнеп, шикләнгәндә,
Һорауҙарың булғанда йөҙ,
Өмөт һалыр күңелеңә,
Дауа булыр йөрәгеңә
Ваҡытында әйтелгән һүҙ,

Ҡайғыларҙан мейең ҡайнап,
Өткән саҡта йәнеңде ҡуҙ,
Дуҫтар һуҙған ҡул шикелле
Терәк булыр бары бер һүҙ -
Ваҡытында әйтелгән һүҙ.

Саф хистәргә ҡара бит ул,
Алыҫлашҡан ара бит ул,
Йөрәгеңә яра бит ул,
Кәрәк саҡта, көткән саҡта
Әйтелмәйсә ҡалған бер һүҙ.

### Туғандарыма

Туғандарым, һеҙҙең менән
Уртаҡ уй-ғәмәлдәрем,
Бергә үтәбеҙ яҙмыштың
Иң яуаплы мәлдәрен.

Туғандарым, һеҙҙең өсөн
Бер нимә лә йәл түгел,
Аҙға ғына айырылһам,
Һеҙҙе һағына күңел.

Туғандарым, һеҙҙән алам
Йәшәргә көс, дәрт, ярҙам,
Һеҙҙең менән донъя матур,
Һеҙ - бүләгем Хоҙайҙан!

Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә,
Һеҙгә тартыла йөрәк,
Ҡайғыла ла, шатлыҡта ла,
Туғандарым, һеҙ кәрәк!

### Ипләберәк...

Ипләберәк әле, зинһар өсөн,
Ипләберәк әле һүҙ менән,
Һүҙһеҙ ҙә бит хистәр, тойғоларҙы
Әйтеп була ҡараш, күҙ менән.

Ипләберәк, зинһар, һүҙең менән -
Яралауың мөмкин һөйөүҙе,
Ҡанһыраған йөрәк күпме сыҙар,
Күпме түҙер яныу-көйөүҙе?

Һағыш булып йөрәгеңдә өтөр,
Ҡайғы булып телер йәнеңде,
Ипләберәк ауыр һүҙҙәр менән -
Һин һағыраҡ, зинһар,бул инде.

Әйләнер ҙә ҡайтыр, йөрәгеңдә
Үкенестәр менән яралар,
Тик уңалыу белмәй һүҙ яраһы,
Алыҫлашыр яҡын аралар...

Яҙмыштарҙы яңылыштан ҡурсап,
Аңлашайыҡ әле күҙ менән,
Һөйөп кенә ҡара күҙҙәремә -
Ипләберәк, зинһар, һүҙ менән...

### Йылҡы йылы

*Каждый из нас по-своему лошадь...*
*(В. Маяковский)*

Йылҡы йылына инәбеҙ -
Ат йылы, ти ҡайһылар -
Матур килеп, матур үтһен,
Башҡа ниндәй ҡайғы бар?

Был тормошта һәр кемебеҙ
Үҙенсә бер ат инде,
Кемдер тик һолола тора,
Кем бесәнгә шат инде.

Кемдер - бәйгенән бәйгегә,
Дан-шөһрәт уға юлдаш,
Кемелер - өйөр айғыры,
Үҙе түш тә үҙе баш.

Сабыр ғына ғүмер буйы
Йөк һөйрәүсе - эш аты,
Ижадсының иңдәрендә
Аҡбуҙаттың ҡанаты.

Аслы-туҡлы хужаһына
Хеҙмәт итә алаша,
Алашаһын йәш толпарға
Бары иҫәр алмаша!

...Һәр беребеҙ был тормошта
Ат инде. Башта - йүгән.
Ауыҙлыҡты сәйнәй-сәйнәй,
Һөйрәйбеҙ донъя йөгөн.

Теләгем шул: һөйрәгән йөк
Ҡыш көнө булһын сана,
Ҡара ерҙә арба һөйрәп
Үтергә етһен сама.

Бер туҡтауһыҙ дилбегәне
Ҡайырмаһасы яҙмыш,
Һыҙырмаһын сыбыртҡылап
Арҡа тиреһен ҡайыш.

Хәрәкәттә - бәрәкәт, ти,
Булайыҡ хәрәкәттә,
Тибенергә иренмәһәк,
Йәшәрбеҙ бәрәкәттә.

Һимертергә ҡуймаһындар
Туҡтатып хаҡлы ялға,
Ел уйнаһын ял-ҡойроҡта,
Теребеҙ? Тимәк, алға!

Алға! Еңеү елдәренә
Елберләһен ялыбыҙ!
Бирешмәйек! Ни тиһәң дә,
Был бит беҙҙең йылыбыҙ!

### Һуңынан!

Үҙ-үҙемә бер ҙә ваҡытым юҡ,
Ял эләкмәй әле был ара,
Өҫтәүенә, февраль менән парлап
Әллә нишләп йәнем болара.

Ҡыл да ҡыбырлатмай, аҙна буйы
Ятыр инем кеүек тойола...
Юҡ шул! Эш ҡапсығым тишелгән дә
Мәшәҡәттәр һаман ҡойола!

Арып-талып, биҙеп киткән саҡта
Күңелемде, һыйпап уңынан,
Алдаштырам: "Ял итерһең әле,
Берәй ҡасан! Аҙаҡ... Һуңынан!"

### Ялсы ғына...

Яланаяҡ атлап киләм
Хистәрем валсығынан,
Тын алғыһыҙ тамаҡтағы
Һөйөүем ҡылсығынан.

Ҡарарға ҡурҡам үҙемә
Хыялым ярсығынан,
Ни ҡылһа ла - ҡөҙрәтендә!
Мин уға ялсы ғына...

### Һөйләшергә ине...

- Шылтыратмай,
был һағынмай икән, -
Тип уйлама, зинһар, яңылыш,
Күңелемдә күптән дауыл уйнай:
Хисем менән эшем - аймылыш.

Артҡа ташлап бөтә үпкәләрҙе,
Аңлашырға кәрәк бик күптән,
Йөрөйбөҙ бит бала-саға кеүек,
Үпкәләрҙе йыйып электән.

Ә күңелдә тик бер генә теләк:
Һөйләшергә ине туйғансы,
Йөрәк төбөндәге рәнйеүҙәрҙе
Күҙ йәштәре менән йыуғансы!

Йыуырға ла онотторға ине
Бөтә булған кире хистәрҙе,
Көнөнә бер шылтыратып һинә,
Бушатырға ине эстәрҙе.

Юҡ, булмаҫтыр инде. Үкенескә
Тороп ҡалыр булған мөмкинлек,
Кемдең ҡәберендә кем иларын
Теләк тә юҡ фараз итерлек...

### Үҙем менән

"Яңғыҙ ҡыйын түгелме?" - тип
Һорай кешеләр,
Тимәк, осрамай уларға
Минең ишеләр.

Түгел! Мин бит яңғыҙ түгел,
Донъям - түңәрәк,
Күңелемдә гөлдәр үҫә,
Оса күбәләк.

Күңелемдә ҡоштар һайрай,
Аяҙ көндәрем,
Намыҫым саф, йоҡом тыныс,
Йомшаҡ мендәрем.

Яңғыҙ ҡалһам, илһам килә,
Тыуа шиғырҙар,
Бәлки, ошо шиғырҙарға
Яҙылыр йырҙар?

Әллә һөйөү, өмөт, хыял
Иптәш түгелме?
Үҙем менән бергә миңә
Ифрат күңелле!

ТАНЫНЫҢМЫ?

# ЫҢҒАЙ СИФАТЫҢДЫ ОНОТМА!



Ҡатын-ҡыҙҙы яралтҡан саҡта Хоҙай Тәғәлә бик оҙаҡ, һуңға тиклем эшләй торған булған. Берҙән-бер көндө Уның эргәһенән үтеп барған фәрештә һорай ҡуя:

- Ни өсөн ҡатын-ҡыҙ һынын шул тиклем оҙаҡ эшләйһең, Аллам?

- Ә һин был һындың барлыҡ камиллығын тояһыңмы? - ти Алла. - Ул теләһә ниндәй аҙыҡты ла ашарға, бер юлы бер нисә баланы ҡосаҡларға, үҙенең ҡосағы йылыһы менән бар сирҙәрҙе лә дауалай алырға тейеш. Һәм ошоларҙың барыһын да ул ике генә ҡул менән башҡарасаҡ...

- Ике генә ҡул менәнме? - тип аптырай фәрештә. - Был мөмкин түгел!

- Мөмкин! Ауырыһа, ул үҙен-үҙе дауалаясаҡ. Тәүлегенә 18 сәғәт эшләй аласаҡ... - ти Алла.

Фәрештә ҡатын-ҡыҙ һынына яҡыныраҡ килеп, уға ҡулдары менән ҡағыла һәм:

- Аллам, ә һин бит уны бик нескә итеп яһағанһың... - ти.

- Эйе, ул бик нескә, - ти Алла, - әммә ул бер үк ваҡытта көслө лә. Уның түҙемлелеген, сыҙамлығын һин күҙ алдыңа ла килтерә алмайһың!

- Ә ул уйлай беләме һуң? - тип һорай фәрештә.

- Ул уйлау ғына түгел, башҡаларҙы һөйләшеп килешеүгә ышандыра белә! - ти Алла.

Фәрештә һындың битенән һыйпап ҡарай һәм, аптырап, шулай ти:

- Аллам, был һындан һыу аға бит. Һин, моғайын, уға артыҡ ныҡ йөк һалғанһыңдыр?

- Был һыу түгел, ә күҙ йәштәре, - тип төҙәтә уны Хоҙай. - Күҙ йәштәре менән ул үҙенең ҡайғыһын, икеләнеүҙәрен, мөхәббәтен, яңғыҙлығын, көйөнөүҙәрен һәм шатлыҡтарын сағылдыра...

Был һүҙҙәр фәрештәгә шул тиклем ныҡ тәьҫир итә һәм ул:

- Аллам, ҡатын-ҡыҙ ысынлап та иҫ киткес ижад емеше! - тип танырға мәжбүр була.

- Унда ирҙәрҙе аптыратырлыҡ көс бар. Ул теләһә ниндәй бәләләрҙе һәм ауырлыҡтарҙы күтәрә белә. Ул бәхет, мөхәббәт, аңлашыу кәүҙәләнеше лә. Ул ҡысҡырғыһы килгәндә көлә, илағыһы килгәндә йырлай. Бәхетле булғанда ла илай, ҡурҡҡанда иһә көлә. Ул үҙе ышанған нәмәләр өсөн көрәшә. Ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы бара. Ул ғаиләһенең бәхете өсөн барыһын да эшләй. Уның мөхәббәте бер ниндәй шартлылыҡты ла ҡабул итмәй. Ул балаларының уңыштары өсөн илай. Дуҫтарының уңышына шатлана. Бала тыуғанда, туйҙар булғанда күккә ашҡандай ҡыуана. Ҡайғы ишерелгән мәлдә йөрәге шартларҙай булып һыҙлана. Ләкин һәр ваҡыт үҙендә йәшәүҙе дауам итеүсе көс таба белә. Ул үбеү һәм ҡосаҡлау әрнегән йөрәктәрҙе дауалай ала икәненә ышана...

Уның бары тик бер генә етешһеҙлеге бар: ул үҙенең барлыҡ ошо ыңғай сифаттары тураһында онота...

ЖУРНАЛИСТ ТА УЛ!

**Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, "Ашҡаҙар" радиоһының баш мөхәррире Рәйсә Ҡазбулатова журналистикаға тоғро хеҙмәт иткән, тап ошо даирәлә үҙенең новаторлыҡ һәләтен күрһәткән, документаль фильмдары менән тарихыбыҙ йылъяҙмаһын байытыуға тос өлөш индергән, шулай уҡ йәш быуын журналистарын тәрбиәләгән күренекле шәхестәребеҙҙең береһе. Тамашасылар уны "Нәҙер", "Арҡайым", "Майҙан", "Автограф", "Үткән ғүмер", "Бай баҡса", "Ҡурай даны" һымаҡ йөкмәткеле тапшырыуҙары аша яҡшы белә. "Ашҡаҙар" радиоһына етәксе булып килгәс, Рәйсә Рәйес ҡыҙы шулай уҡ күп яңылыҡтар индереүгә өлгәште, тапшырыуҙарҙың йөкмәтеһен байытыуҙа, төрләндереүҙә коллектив менән берлектә ҙур эштәр алып бара. Алтын фонд һәм заманса проекттар "Ашҡаҙар" радиоһының йөҙөн билдәләй. Хеҙмәттәштәре Рәйсә Ҡазбулатованы юҡҡа ғына туктауһыҙ эш өҫтөндәге бал ҡорто менән сағыштырмайҙыр. Замандаштарының яҡшы эштәрен халҡына күрһәткән, улар миҫалында тормошто һөйөргә саҡырған тынғыһыҙ йөрәкле журналистың үҙенә лә бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# БЕҘ БЕЛГӘН РӘЙСӘ...



➔ **Беҙ белгән Рәйсә Рәйес ҡыҙы - телевидениелағы һәм радиолағы әллә күпме проекттар авторы, бай тәжрибәле журналист, режиссер, сценарий һәм шиғырҙар яҙыу оҫтаһы, мәрхәмәтлек сараларын ойоштороусы һ.б. Бер үк ваҡытта, беҙ һеҙҙе хәстәрлекле әсәй һәм өлгөлө өләсәй, тип беләбеҙ. Балаларҙы үҫтереү, оло юлға сығарыу шулай уҡ яуаплылыҡ, ваҡыт талап итә. Эш һәм ғаилә тип өҙөлөп киткән саҡтар булғандыр. Ҡайҙан көс таба инегеҙ, бала тәрбиәләүҙә нимә һеҙҙең өсөн мөһим булды?**

- Тәүлектә 24 сәғәт бит. Бик теләһәң, уны 25 итеп тә була. Мин эште алға ҡуйып, ғаиләмде икенсе планға ҡалдырмаҫҡа тырыштым. Икеһе өсөн дә яуаплылыҡ тойоп йәшәнем. Улдарыма иң беренсе йәшәү көсө һалырға ынтылдым. Сөнки атай-әсәй һәр ваҡыт эргәләрендә йөрөмәй. Мәшәү булмаһындар, үҙ-үҙҙәрен тәрбиәләй белһендәр, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәһендәр, үҙ һүҙҙәренә, принциптарына тоғро ҡалһындар, сит йоғонтоға аумаһындар. Белемле, тәрбиәле, рухлы, гүзәл кешеләр иткем килде уларҙы. Ғаиләлә атай абруйы - беренсе урында. Өс ир-егет араһындағы ихтирамлы мөнәсәбәттәрҙе һаҡларға тырыштым. Хәҙер үҙаллы улдарымдың тормошона ҡыҫылмайым, артыҡ иғтибар менән йонсотмайым, кәңәште лә һораһалар ғына бирәм. Йәштәр бит аҡыллы, уҡымышлы, күпте белә, ейәнем менән аралашҡанда ла, ата-әсәһенең теләгенә, фекеренә ҡолаҡ һалам. Шөкөр, тормоштарынан ҡәнәғәтмен.

➔ **Телевидениелағы һәр тапшырыуығыҙ популяр. Шулай ҙа "Бай баҡса" тапшырыуы халыҡсанлығы менән айырылып торҙо. Тап ошо тапшырыу буйынса таныш, урамда күрешеүселәр күп булдымы? "Бай баҡса"ны әҙерләгәндә, бәлки, ҡыҙыҡ хәлдәргә лә тарығанһығыҙҙыр?**

- "Бай баҡса" тапшырыуы аша мине түгел, Зөһрә Ҡотлогилдина менән Нияз Мәһәҙиевты иҫләй тамашасы. Уларҙағы халыҡсан юмор, мөләйемлек күптәргә оҡшаны. Ә мине тура эфирҙар алып барған саҡта ғына таный торғайнылар. Хәҙер кадр артында ғына эшләгәс, ул "күркыныс" та янамай. Ғүмүмән, һәр ерҙә лә матур йөрөү, үҙеңде иплe тотоу - ул ҡандан, тәрбиәнән. Махсус тырышлыҡ һалырға кәрәкмәй. Бергә эшләгән йә ситтән саҡырылған хеҙмәттәштәрем "артығын ҡылана" башлаһалар, оялтырға, шелтәләргә лә күп һорамайым, үҙем йомшаҡ холоҡло булһам да. "Бай баҡса"ны төшөргәндә ҡыҙыҡ хәлдәрҙе үҙебеҙ уйлап таба инек. Йә Нияз ағайҙың башына бер күнәк сәтләүек ҡойола, йә баҙҙан ҡулына яңылыш ҡына бер банка йәбешеп сыға, йә Зөһрә апай гамактан осоп төшә. Күңелле мәлдәр, күңелде йылытыр иҫтәлектәр.

➔ **Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә, тиҙәр. Сәфәр, командировкалар биргән иң ҙур байлыҡ нимәнән ғибәрәт?**

- Хеҙмәттәштәрем менән съемканан ҡайтҡанда һәр ваҡыт анализ эшләйбеҙ, ижади сәфәрҙең, төшөргән яҙмыштың, русса әйткәндә, "изюминка"һын эҙләйбеҙ. Командировкалар биргән иң ҙур байлыҡ - фәһемле яҙмыштар, һоҡланғыс кешеләр, көслө шәхестәр. Уларҙың һәр береһенән тормошта нимәгәләр өйрәнеп була. Иң мөһиме, улар йәшәү көсөн арттыра. Ғөмүмән, мин һәр бер геройыма ғашиҡ булам. Һәр береһе тураһында әҫәр яҙып булыр ине. Ә тапшырыуҙар бит иң күбе - 26 минут. Портретҡа штрихтар ғына.

➔ **Тырыш һәм маҡсатлы журналист ҙур идеяларын тормошҡа ашыра киләләр, тигән фекер тыуа, әллә яңы проекттар хыял ғына булып ҡаламы?**

- Радио, телевидение - тәү сиратта конвейер. Ә ҙур проекттар улар көндәлек мәшәҡәттәрҙе онотоп, ситкә ҡуйып эшләнә. Мин үҙемде ғәҙәти, эфир тултырыусы журналист тип иҫәпләйем. Әммә үҙемә ышанып тапшырылған йүнәлешкә яуаплы ҡарайым, йөрәгемде һалам. Утыҙ биш йыл буйы барған тапшырыуҙар шәлкемен, туҡта әле, мин шәп проект эшләйем дә конкурста еңәйем, танылыу яулайым, тип ташлап ҡуймайым. Конвейер араһында ла ниҙер эшләргә тырышыла, әлбиттә. Мөмкин булһа, тик фильмдар менән генә шөғөлләнер инем. Шулай хыялланып, хаҡлы ялға етелде инде.

➔ **Бөгөн журналистика һөнәрен үҙләштерергә теләгән йәштәргә ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?**

- Бөгөнгө журналист - ул оҫта яҙыусы, һөйләүсе генә түгел, заман технологияларын да белергә бурыслы. Икенсенән, киң ҡарашлы, һәр өлкәлә белемле, хәбәрҙар һәм грамоталы булырға тейеш. Ҡыйыу, үткер, аналитик, коммуникатив, ижади һәләткә эйә, шул уҡ ваҡытта мәҙәниәтле, баҫалҡы журналистарҙы мин ныҡ хөрмәт итәм. Һәм, әлбиттә, коллективта эшләгәс, команда уйынсыһы булырға кәрәк.

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмә ҡорҙо.

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ



# БАЛАҺЫНА ОЖМАХ БУЛДЫРА

**Ҡул ауыртҡанда - күҙҙәр илай, ә күҙҙәрҙән йәштәр атылғанда - ҡулдар уларҙы һөртөп ала. Ир менән ҡатын шул ҡул һәм күҙ кеүек булырға тейеш, тигән фекергә еткерә беҙҙе япон мәҡәле.**
**Ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәте, уның сибәрлеге, мөләйем йөҙө ир-егет өсөн мөһим фактор булған, бар һәм шулай ҡаласаҡтыр. Әммә мөнәсәбәттәрҙең оҙаҡҡа һуҙылыуы өсөн матурлыҡ ҡына етмәй - был ябай ғына хәҡиҡәт барыһының да аңына һеңгәндер. Ни өсөн ир-егет нәҡ үҙе һайлаған ҡатын-ҡыҙҙы тормош юлдашы итеп күргәне сит кешегә йыш ҡына сер булып ҡала. Ул гүзәл заттың нимә менәндер йәлеп иткән сифаттары ла булырға мөмкин, бәлки, ниндәйҙер кире ҡаҡлыҡтырған етешһеҙлектәре лә күңелгә яҡын булыуы ихтимал. Бөтәһен дә белеп бөтөп булмай, сөнки ғүмерлек юлдашын һайлау критерийҙары һәр ир-егеттә төрлө-төрлө. Шулай ҙа, ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙа ниндәй сифаттарҙы баһалай икән, уларҙың әйткәненә ҡолаҡ һалайыҡ әле.**

***Динислам ИРҒӘЛИН, студент:*** Көндәлә ниндәй генә фекерҙәр йөрөтһәк тә, хәҙистәрҙә әйтелгәнсә, Әсәй - балаһына ерҙә ожмах булдырған кеше. Үҫеп еткәс кенә, төрлө ауырлыҡтар, уйланыуҙар аша ғына, беҙ шул һүҙҙәргә ысынлап төшөнәбеҙ. Шуны ла аңлайбыҙ: бында ир-егетең роле - Әсәгә шул маҡсатын тормошҡа ашырырға ярҙам итеү. Шуға ла мин балаларымдың әсәһен шулай күҙ алдыма килтерәм: ул буласаҡ балаларыбыҙ өсөн ерҙә ожмах булдырырлыҡ сифаттарға - мөхәббәтле, тоғро, иманлы, игелекле, йомшаҡ күңелле ҡатын-ҡыҙҙарҙан булырға тейеш.

***Илсаф ҒӘЛӘҮТДИНОВ, студент:*** Буласаҡ кәләшемде тәү сиратта аҡыллы, аңлы, иманлы итеп күрәм, ә сибәрлеге мөһим булһа ла, уныһы шуларҙан арттараҡ килә инде. Ғәйепләгәндән түгел, ә һине аңлай белгән, һәр саҡ ярҙамға килгән ҡатын ғына йортҡа тынысылыҡ мөхите булдыра, иренә ышаныс күндерә. Ундай ҡатын ҡасан һуҙ ыҫҡынырға, ҡасан өндәшмәй ҡалырға икәнен аңлай, һәм шуныһы менән бик ҡәҙерле лә була.

Балаларымдың әсәһе, һис шикһеҙ, гүзәл тоҡом тәрбиәләрлек тәрбиәсе буласаҡ. Балалар үҫтереү тигән йөк икебеҙҙең дә елкәбеҙҙә ятасаҡ, әлбиттә, әммә тәрбиәсе таланты барыбер ҙә әсәләрҙең аҡылына бәйле, тип уйлайым. Мәҫәлән, бала көйһөҙләнә икән, әсәһе уны тынысландырыр өсөн яңы уйынсыҡ артынан магазинға йүгермәйәсәк, ә эргәһенә ултырып, аңлайышлы тел менән балаға улай ярамағанын аңлатасаҡ. Сөнки бала "юҡ" тигән һүҙҙе әрләүһеҙ ҙә аңларға тейеш. Әсәй әйтә икән "ярамай" тип, тимәк, ярамай.

***Ренат НИҒМӘТУЛЛИН, тәрбиәүсе:*** Бала саҡтан беҙҙең күңелгә әсәй йылыһы менән бергә ҡояшлы мотивтар үтеп инә. Ғүмер буйы беҙ ошо күңелдә йәшәгән нурлы һүрәтте ҡәҙерле өлгө итеп һаҡлайбыҙ, һәм шул һүрәткә тиң кешене тапһаҡ, йөрәгебеҙ балдай ирей, беҙҙе бала саҡтағы һымаҡ шатлыҡлы тойғолар биләп ала.

Тормошта ҡайһы берәүҙәр хаталанырға, аҙашып йөрөргә, алама кешеләр йоғонтоһона бирелергә мөмкин. Шул саҡта әсәй йылыһын тойоу, әсәйҙең өгөт-нәсихәттәрен иҫкә төшөрөү мөғжизә тыуҙырырға, һине бар икеләнеүхаталарҙан арындырырға мөмкин. Был мөғжизә һинә ҡотҡарыусы булып килә.

Шуғалыр ҙа ир-егет буласаҡ ҡатынын, балаларының әсәһен, нисек кенә булмаһын, барыбер үҙенең әсәһе өлгөһөндә һайлай. Егет кеше хатта үҙенең бындай ҡарарының тәбиғәтен дә аңламауы ихтимал, ләкин хәтерҙә ҡалған һәм күңелгә һеңгән әсәй образы барыбер үҙенекен итә инде.

Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ яҙып алды.

✓ *Әсәйем гәзитте семәрләп ҡырҡып, ҡабыҡлы бешкән картүк менән елемләп, тәҙрәнең өҫкө өлгөһөн ҡапларлыҡ итеп тыштан ингән ишек ҡаршыһындағы тәҙрәгә "пәрҙә" йәбештерә. Ул заманда гәзит-журналдарҙы күпләп алдыралар ине.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАЙҺЫ МӘЛДӘ ҠУРҠАЛАР?

■ Ҡытайҙа ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргәндәр. Унда 120 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙы тәҙрәһе булмаған бүлмәгә бикләгәндәр. Һынау мәлендә тәүҙә бүлмәнең утын һүндергәндәр, аҙаҡтан яндырғандар. Шулай уҡ уларға ҡурҡыныс һүрәттәр күрһәткәндәр һәм төрлө тауыштар тыңлатҡандар. Гүзәл заттарҙың ҡайһы осраҡта нығыраҡ ҡурҡыуын пульс йышлығы һәм тир бүленеү менән билдәләгәндәр. Асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙар төндә бүлмәлә хатта ут янып торғанда ла нығыраҡ ҡурҡа икән. Төндө кеше хәүефле мәл тип ҡабул итә һәм шуға ла һиҙгерлек һәм реакция көсәйә.

■ Ҡыҙғаныска күрә, барыбыҙ ҙа сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуыбыҙ менән маҡтана алмайбыҙ. Шулай ҙа аҙнаһың биш көнө дауамында көнөнә бер тапҡыр ғына булһа ла йәшелсә ашайһығыҙ икән, һеҙ үҙегеҙ менән ғорурлана алаһығыҙ. Был осраҡта организм шлактарҙан таҙара, тип белдерә Көньяҡ Корея ғалимдары. Сеулдағы Милли университетта үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, биш көнлөк йәшелсә диетаһынан һуң организмда зарарлы химик матдәләр күләме түбәнәйә. Йәшелсә ашау ярҙамында фталат һәм антибиотик матдәләрҙең күләмен дә түбәнәйтергә мөмкин.

■ Гел һуңлап йөрөүсе кешеләр була, әммә улар быны юрамал эшләмәй. Һуңлау ғәҙәте - бары тик холоҡтоң бер һыҙаты һәм быны төҙәтеү ныҡ ауыр, ти белгестәр. Әммә үҙ алдына төрлө маҡсаттар ҡуйып йәшәүселәр һуңлау ғәҙәтенә эйә түгел икән. Бер генә маҡсатты эҙәрлекләүселәр бер ҡасан да тиерлек һуңламай, тик бер юлы бер нисә эш эшләүселәр гел генә ваҡытына килмәүҙәре лә ихтимал. Яй, ҡабаланмай ғына йәшәүселәр шулай уҡ йыш һуңлай. Йәш ата-әсәләр, үҙенең вазифаһы менән риза булмаусылар ҙа һуңлаусан була, ти ғалимдар.

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модаға инеп китте һәм ул иң сәләмәт туҡланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Бындай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансжир, зарарлы углеводтар берәүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәҫәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетҡа килтерә.

■ Көслө стресс кисергәндән һуң, кеше шунда уҡ ятып йоҡлаһа, ул уны енелерәк кисерәсәк. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай ваҡытта иң яҡшы һәм тәьҫирле дарыу булып йоҡо тора. Әгәр ҙә кеше юлда берәй хәл-ваҡиғаның шаһиты булған йәки үҙе аварияға эләккән икән, йоҡлап алғандан һуң уның эмоциональ торошо күпкә яҡшырасаҡ.

ҺӨНӘРЛЕ ЛӘ БЕҘ!

# "ШАРШАУЛЫ БУЛҒАНҒА ХАЛҠЫМ

## ҡурсаулы тыныс торған..."

**Бөрйән район мәҙәниәт һарайында "Шаршаулы булғанға халҡым ҡурсаулы тыныс торған" исеме аҫтында район "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ҡарамағындағы халыҡ коллективы исемен йөрөткән "Кәрәҙ" биҙәү-ҡулланма клубының һуңғы йылдарҙа тормошҡа ашырған "Шаршау" проектын йомғаҡлау сараһы үтте.**

Башҡорт ғаиләһендә әҙәм балаһы шаршау артында был донъяға килгән, сабый сағында ят күҙҙәрҙән сәңгелдәктә ҡорған аҫтында һаҡланған, кейәү менән кәләш ҡорона ингәс, сымылдыҡ артында ҡушылған, ҡартайып кәре киткәндә ҡорған артында көн күргән, һуңғы юлына - ер өйөнә күскәндә лә шаршауҙың кәрәге тейгән. Ошо хәҡиҡәтте сағылдырҙы ла инде фойела ойошторолған күргәҙмәләге ағинәйҙәр ҡулы менән тегелгән-сигелгән төрлө-төрлө шаршау-ҡорғандар. Байрамға йыйылыусы халыҡ иң тәүҙә ошо шаршау-ҡорғандарҙы ҡарап сыҡты. Беҙҙең быуындың бала сағына, йәшлек осорона тура килгән 50-60-70-се йылдарҙағы ауыл өйө интерьерының бер өлөшө, биҙәге булған тәҙрә пәрҙәләре, караuat-урындыҡ ҡорғандарынан башлап, бөгөнгө көн ҡаҙағында торған маскировка шаршауының яңы вариантына тиклем бар ине унда. Ысын мәғәнәһендә был фойелағы тамашаға күҙҙәр ҡамашты! Тамашасылар, ҡунаҡтар - "Ағинәй" төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Бөрйән район хакимиәте башлығының социаль эштәр буйынса урынбаҫары Венера Вәлиева, район мәҙәниәт бүлегенең элекке етәксеһе Клара Тләүбаева менән бергәләшеп, күргәҙмәләге эштәрҙе ентекле ҡарап, һәр оҫтабикәнең эшенә баһа бирҙе.

Таңһылыу Ғимрановаһыҙ күргәҙмә теүәл булмаҫ ине, сөнки уның районыбыҙҙың ҡатын-ҡыҙҙары араһында алып барған оҫталыҡ дәрестәренең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Үҙебеҙгә генә хас булған милли кейем, биҙәүестәр, ҡашмау-селтәрҙәрҙе профессиональ кимәлдә өйрәтеүсе остаз итеп танайбыҙ беҙ уны. Байғаҙы, Ғәлиәкбәр, Әбделмәмбәт, Кейекбай, Ғәҙелгәрәй, Байназар, Яңы Мөсәт ауылдары оҫталары - Таңһылыу Хисмәтуллина, Рәйлә Баязитова, Хәснә Исламбаева, Гөлдәр Әхмәтова, Венера Ҡарамышева, Гөлдәр Сөләймәнова, Зәкиә Муллағолова, Нәилә Мәсәғүтова, Нәзифә Зәйнуллиналар үҙҙәренең беҙҙең Бөрйән ерлегенә генә хас булған боронғо өлгөгә ҡарап тергеҙелгән шаршауҙарын баһаға ҡуйҙы.

Күргәҙмәнең бар кешене үҙенә ылыҡтырып торған тағы бер үҙенсәлекле мөйөшө булды. Бала саҡтары 50-60-70-се йылдарға тура килгән быуын вәкилдәренең барыһына ла таныш булған ябай ауыл өйөнөң ҡотон һаҡлаған тәҙрә пәрҙәләре, карауат-урындыҡ ҡорғандары араһында гәзиттән ҡырҡып эшләнгән селтәре лә, марляны синьҡаға буяп ҡулланылғаны ла, сигеүлеһе лә, тегеү машинкаһында ришелье алымы менән башҡарылғаны ла бар ине (Әйткәндәй, район мәҙәниәт йорто рәссамы Гөлсөм Үтәбаева әҙерләп биргән ауыл тәҙрәләре макетын ҡулланыу күргәҙмәнең ошо мөйөшөнөң бәсен күтәрҙе).

Улар тураһында иҫтәлектәр менән уртаҡлашыу Иҫке Собханғол ағинәйе Зәкиә Суфьянова өлөшөнә тейҙе: "Әсәйем Әминә Мөбәрәк ҡыҙы Кинйәкәйева (Һағынбаева) 1939-1946 йылдарҙа илебеҙ сиктәрен Алыҫ Көнсығышта һаҡлап, ете йыл йөрөп ҡайтҡан Йәмилха Мөхәмәҙиә улы Кинйәкәйев менән ғаилә ҡороп, 10 балаға ғүмер бирәләр. Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы барлыҡ ауыл ғаиләләрендәге кеүек, ун баланың берәүһе генә 1972 йылда больницала тыуа. Ҡалғандары өйҙә шаршау артында, йылы һыу һәм кендек инәйҙәренең имле-шифалы ҡулдары, изге доғалары ярҙамында донъяға аяҙ баҫа. Беҙҙең бала саҡҡа тура килгән 50-60-сы йылдарҙа, нисек кенә етешһеҙ йәшәһәләр ҙә, ауылым ҡатын-ҡыҙҙары-әсәй-өләсәйҙәр быуыны зауыҡлы, ҡотло-ырыҫлы донъя көтөргә тырыштылар. Яҙ һайын өй эсендә түбә, стеналар ҡырып йыуыла, ә иҙәнде әйтеп тораһы ла түгел: көн аша һап-һары итеп ҡырып йыуыла. Бер-ике быҙау, һарыҡ-кәзә бәрәстәре сыуал артындағы мөйөштә төн сыға, сыуал башы-һәндерәлә шаршау артында шаҡырайып тунған бейәләй-быймалар киптерелә. Ҙур, иркен, шаршаулы урындыҡтың бер яҡ ситендә һандыҡ. Йоҡонан тороу менән, барлыҡ түшәк-ҡаралды һандыҡ өҫтөнә тәҫләп өйөлә.

Беҙ йоҡонан тороуға самауыр ҡайнаған, картүк йә бутҡа бешкән - урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп ебәреп, бөтә ғаилә бергә ашарға ултыра. Сәңгелдәктә ҡорған аҫтында кемдер йоҡлай, ул да эргәлә генә. Балаларҙың күмәк булыуы - оло ҡыуаныс, бәхет. 7х 6 метр ҙурлығындағы өй үҙе таҙа, үҙе ҡотло, нурлыҡояшлы!

...Әсәйем гәзитте семәрләп ҡырҡып, ҡабыҡлы бешкән картүк менән елемләп, тәҙрәнең өҫкө өлгөһөн ҡапларлыҡ итеп тыштан ингән ишек ҡаршыһындағы тәҙрәгә "пәрҙә" йәбештерә. Ә аҫтына, ауылда туҡыма һатылмаһа ла, йоҡаҡ ҡына ситсанан ҡорған элеңә. Ул заманда гәзит-журналдарҙы күпләп алдыралар ине. Обой урынына аш бүлмәһенең диуарҙарына район гәзите "Еңеү юлында", республика баҫмаһы "Совет Башҡортостаны" гәзите йәбештерелә ине. "Ағиҙел", "Һәнәк" журналдары ла даими килеп торҙо. Балалар "Пионер" журналын, "Башҡортостан пионеры" гәзитен "һыу кеүек эстек". Гәзит-журналдарҙы тәләфләү юҡ, улар ҡулланҡулға күсеп, уҡылып туҙалар ине. Стенаға йәбештерелгән гәзиттәрҙән өсдүрт йәшлек Шәмсиә һеңлем менән үҙем биш-алты йәшлек кенә сағыбыҙҙа шыма итеп уҡырға өйрәнеп үҫтек.

Урындыҡ, карауат аҫтарындағы ояла йоморҡа һалып, бәпкә сығарғансы ултырған ҡаҙға ҡамасау һалмаҫ өсөн, йә булмаһа, өҫтәл аҫтары өңрәйеп күренеп тормаһын өсөн ауылдың ҡул эштәренә маһир еңгәйҙәренән селтәрле ҡорғандар бәйләтеп алалар ине әле ул йылдарҙа (хаҡына йомарлам май, ҡорот, ҡатыҡ түләп)! Барына шөкөр итеп, юғына сабыр булып, беренән-бере өйрәнеп матурлыҡ тыуҙырып, донъяны йәмләп йәшәгән оло быуын яҡты хәтирә-иҫтәлектәр уята беҙҙә..."

Ғәлиәкбәр ауылынан Хәснә Исламова апайҙың хәтирәләре лә бик фәһемле булды: "Элек килен булып

ҠАЙҒЫЛЫ ЛА УЛАР!

# "ҺОРАП АЛҒАН УЛЫМ ИНЕ..."



**Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылынан 23 кенә йәшлек Марсель Ғәбитов Махсус хәрби операцияла батырҙарса һәләк булды. Ул Авдеевка, Очеретино, Селидово ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша. Тәүҙә штурмлаусы, артабан АГС-17 операторы, радиоэлектрон көрәш системаһының бүлексә командиры булараҡ махсус тәғәйенләнештәге подразделениела үҙ бурысын үтәй. Ошо көндәрҙә Марсель Ғәбитов белем алған Әбделкәрим ауылы мәктәбендә уның яҡты иҫтәлегенә "Герой партаһы" асылды. Иҫтәлекле сарала яугирҙың ата-әсәһе, һеңлеһе Азалия, туғандары, уҡытыусылары ҡатнашты. Барыһы ла Марселде кешелекле, ярҙамсыл, итәғәтле, эшлекле, тырыш, ҡыйыу егет тип иҫкә алды. Сағыу йондоҙ кеүек йәшәп, йәшнәп, балҡып һүнгән Марсель Фиргәт улы Ғәбитов тураһындағы иҫтәлектәрҙе уның әсәһе Сәгирә Илһам ҡыҙының хәтирәләре аша тәҡдим итәбеҙ.**

- Ғаиләбеҙҙе шатлыҡҡа сорнап килеп ингән балалар ине бит улар - Азалия менән Марсель. Уларҙы үҙемдең йөрәкте ярып сыҡҡан баламдай күреп тәрбиәләнем. Паспорт алырға ваҡыт еткәс, рөхсәт һорап, икеһе лә беҙҙең фамилияға күсте, иремдең исемен "атаһы" тигән графаға яҙҙырттылар. Ике бала ла бер ваҡытта ла тыуҙырған ата-әсәләре тураһында иҫкә алманы. Ғүмер буйы улар "атайым" тип - иремде, "әсәйем" тип мине яратты. Уттан, һыуҙан, ерҙән һорап алған улым ине бит ул Марсель.

Ул шундай матур бала булды. 9-сы кластан һуң Урал аръяғы агросәнәғәт колледжында уҡыны. Егеттәр менән төрлө эштә йөрөп, аҡса ла эшләне. Бер ваҡыт кемдер төндә тәҙрә шаҡый. Ҡараһам, Марсель балам. Ҡукрәгенә йылы икмәк тығып алған. "Әсәй, сәй ҡуй. Беренсе эш хаҡымды алдым. Йылы ғына икмәк алып ҡайттым", - тине. Балаҡайғынам, беренсе эш хаҡына ҡустәнәскә икмәк алған булған. Ул бер ваҡытта ла эсмәне. Рюмка тотҡанын да күргәнем булманы. Йырмонға ғашиҡ ине. Үҙе шиғырҙар яҙҙы, үҙе уларға көй һалды.




оҙатылып килгән ҡыҙҙарҙың бирнә һандығындағы иң төп ҡаралдыһы шаршау булған. Минең әсәйемдең шаршауы беҙ үҫкәндә лә йортобоҙҙо биҙәй ине әле. Уны ҙур урындыҡты икегә бүлеп элеп ҡуйғайнылар. Ҙур яҡта олатайымдар, түрбаш яҡта беҙ йоҡлай торғайныҡ. Тәҙрәләргә эленгәнен пәрҙәне лә ҡорған ти инек. "Эңер төштө, ҡорғандарҙы тарт", - тип ҡуша ине минә әсәйем...

Бәпестәрҙең сәңгелдәгенә лә ел-елпеүҙән, насар күҙҙән һаҡлаусы ап-аҡ ҡорған эленә ине. Буй етерлек өҫтә, түшәмдән үк төшкән бауҙа элеүле торған сәңгелдәк ҡәҙерле, ҡурсаулы урын булды. Хәҙерге йәштәрҙең сабый баланы иҙәндә, аяҡ аҫтында торған шарран-яран асыҡ коляскаға һалып ҡуйыуҙары һис ярамаған күренеш ул!

Бер яҡтан ҡунаҡтар өсөн тәғәйенләнгән, икенсе яҡтан ҡатын-ҡыҙҙарҙың аш-һыу әҙерләү урынын бүлеп тороусы тирмә шаршауы ла, мәсеттә ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар ағын айырып торған шаршау ҙа кешене тәртипкә, тыйнаҡлыҡҡа өйрәтә, Ислам диненең талаптарына тап килә торған күренеш ине инде элек..."

Әтек ауылы ағинәйе Алһыу Зарипова әңгәмәгә ҡушыла: "Ҡорғандар, беҙҙең тормошобоҙҙа бик күҙгә эленмәһә лә, үҙенә күрә мөһим генә урын алып тора. Мәҫәлән, тәҙрәләргә ҡорған элеүҙе генә алғанда ла - ул төп өй йыһазы булып һанала кеүек. Ҡорғанһыҙ тәҙрәләр өйҙө бик ҡотло итеп күрһәтмәй. Ҡорғандар өй декоры булып ҡына ҡалмай, ул ҡышҡы һыуыҡтарҙа йылы һаҡлаусы, йәйге эҫелә эҫенән ҡотҡарыусы, тыштағы сит-ят күҙҙәрҙән, тауыштарҙан ышыҡ һәм башҡалар... Тәҙрәләрҙе төнгөлөккә ябырға ҡушҡан хәҙис тә бар Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләмдең. Унда киске эңер еткәс, бисмилла әйтеп, тәҙрәләрҙең ҡорғанын тартырға, ишектәрҙе бикләргә, һауыт-һабаларҙы, аш-һыуҙарҙы ябып ҡуйырға кәрәк, тип әйтелә..."

...Шаршауҙар күргәҙмәһе бөгөнгө көн үҙәгендә торған маскировка ҡорғаныһының бик үҙенсәлекле вариантын күрһәтеү менән тамамланды һәм уны күргәндәрҙең барыһында ла ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Әйткәндәй, райондың "Ялҡын" өлгөлө бейеү ансамбленең (етәксеһе Нәилә Нурдәүләтова) егеттәрҙе яуға оҙатыу күренешенә бағышланған әрңеле ҡумаҡ бейеүе лә маскировка шаршауы фонында башҡарылды. Бейеүҙең кульминацияһы - егеттәрҙең яурынына маскировка бөркәнсектәре ҡаплап хушлашыу мәле - йөрәктә ятҡан әрнеүҙәрҙе күҙ йәштәре итеп ағыҙҙы (Был комуфляж плащ-бөркәнсектәрҙе "Кәрәҙ" клубы ағинәйҙәре тегеп биргәйне). Бейеүҙә ҡатнашыусы егет һәм ҡыҙҙарға был күренеште ысынбарлыҡта түгел, сәхнә әҫәре итеп кенә үткәрергә яҙһын, тип доға ҡылды ағинәйҙәр.

"Мираҫ" халыҡ төркөмә, Ғәҙелгәрәй, Яңы Мөсәт, Ҡолғона ауыл мәҙәниәт йорттарының фольклор төркөмдәренең "Килен төшөрөү", "Исем ҡушыу", "Бирнә һандығы асыу", "Бәпес күреү" йолаларына бағышланған сығыштары һәм өлгөлө "Ялҡын" ансамбленең килен төшөрөүгә бәйле "Йыртыш" йолаһы бейеүе сценарийға бик уңышлы килеп ҡушылды! Сценарий шағирә Рита Фәтҡуллинаның "Шаршау" шиғыры буйынса төҙөлгәйне. Кеше ғүмерендә шаршауҙың нисәмә этапта ҡулланылышына ҡарап, башҡа сығыштар менән аралаштырып уҡылһа ла, шиғыр үҙенең бөтөнлөгөн юғалтманы. Сәхнә оҫталары Илфат Исламов һәм Гөлсинә Сәғитова башҡарыуында шағирәнең әйтер һүҙҙәре тамашасыларҙың йөрәгенә үтеп инде - тәьҫораттар менән алышҡанда күптәр ошо фекерҙе еткерҙе.

Сараның уңышлы үтеүенә булышлыҡ итеп тә, эштәре күҙгә асыҡтан-асыҡ салынмай ҡалған район мәҙәниәт йорто директоры Гөлнур Нәҙершинаға, сәхнәне сценарийға ярашлы интерактив фон менән биҙәүсе Ирек Ҡолмәнбәтовкә, тауыш операторы Урал Ниязғоловҡа, күргәҙмә ҡороу өсөн бөтә уңайлыҡтар булдырышып йүгереп йөрөгән Фәнис Татлыбаев, Руслан Мырҙағолов, Илсаф Фәйзуллинға, йыйылыусыларҙы яҡты йөҙ күрһәтеп ҡаршылаусы-оҙатыусы Эльвира Хөсәйенова, Алһыу Сирбаеваға рәхмәтле булды ағинәйҙәр.

Районыбыҙҙың ғорурлығы булған шағирә Айһылыу Ғарифуллинаның ошо сараға бағышлап яҙған, халҡыбыҙ өсөн шаршау-ҡорғандың әһәмиәтен дә күҙ алдына баҫтырған шиғыры байрамдың исеме һәм девизы булып яңғыраны:

*Шаршау аса өй доньяһын*
*Рәхим итегеҙ, тиеп.*
*Шаршауҙы башҡорт борондан*
*Ҡулланған инде белеп.*
*Бисмиллалап шаршау аҫҡан*
*Көн ҡаршылап халҡыбыҙ.*
*Шаршаулы донъя - йәшерен,*
*Сер асмаҫҡа хаҡлы беҙ.*
*Шаршау эсендә - сабыйҙар,*
*Шаршау артында - килен.*
*Яман күҙҙәрҙән һаҡлаған*
*Ошолай башҡорт илен.*
*Шарран-яра асмаған ул*
*Өй эсендә ҡот тотҡан.*
*Шаршау-кәртәнән яман һүҙ,*
*Насар уйҙар ҡаҡлыҡҡан.*
*Шаршау - донъя йәме булған,*
*Һаҡлаған өйҙәң ҡотон.*
*Эске донъяһын бикләгәс,*
*Бәхеткә тулған йорто.*
*Башҡорт шундай фәйләсуф ул -*
*Аҡыл йөрөгән алдан.*
*Түрене шаршауҙар элеп,*
*Мәкергә тоҙаҡ һалған.*
*Сепрәк кенә түгел шаршау -*
*Үҙе һаҡ, үҙе ҡорған.*
*Шаршаулы булғанға халҡым*
*Ҡурсаулы, тыныс торған.*
*Өйҙәң биҙәге ул - шаршау,*
*Мираҫ боронғолоҡтан.*
*Шаршаулы халыҡ бөлмәгән -*
*Рух илен ныҡлы тотҡан.*
*Шаршаулы булған - отҡан.*

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

---

Махсус хәрби операцияла ике йыл ҡатнашты. Даими рәүештә Телеграмм аша аралаштыҡ. Һуңғы хәрби заданиеға сығыр алдынан: "Әсәй, сәләм, мин иртәгә заданиеға сығам", - тине. "Балам, имен-һау ғына бул, үҙеңде ҡарап ҡына йөрө", - тием. "Әсәй, тырышырмын. Әгәр ҙә ошо заданиенан да имен сыҡһам, тура ауылға ҡайтырмын. Мин шул тиклем һинең еҫеңде һағындым", - тине. Хәҙер килеп аңланым, ул бала бит әсәй еҫен һағынған булған.

Был балаҡай бер тапҡыр ныҡ яраланды. Эргәһендә снаряд ярыла. Үҙҙәре атап йөрөткән "тропа смерти" аша ете сәғәт үтә. Новосибирск ҡалаһына самолет менән оса. Дауалангас, беҙгә ҡайтты. "Атай, мине көслө генә мәсеткә алып бар, һәләк булған егеттәремә аят бағышлатҡым килә", - тигәс, атаһы Өфө ҡалаһындағы мәсеткә алып барҙы. Китергә ваҡыты еткәс, алып ҡалырға теләнек. Ләкин ҡырҡа баш тартты. "Мин барырға тейешмен, унда егеттәрем көтә", - тине.

Икенсе тапҡыр машина менән китеп барғанда улар өҫтөнә дрон килеп төшә һәм машина шартлай. Һигеҙ егеттең икәүһе генә тере ҡала: минең улым һәм тағы ла бер уруҫ егете. Һәләк булғандарҙы күтәреп, теҙеп һалғас, улым уларға бағышлап аят уҡый. Шул ваҡыт эргәләренән үтеп барған машина уларҙы ултыртып, медицина пунктына алып барып ҡалдыра. Улыма операция эшләйҙәр. Дрон ярсыҡы тубығын ярып сығарған була. Өс госпиталдә дауалангас, уларҙы хәрби эшелонға тейәп, беҙҙең яҡҡа сығаралар. Юлы беҙҙең республика аша үтәсәген белгәс, бер нәмәгә лә ҡарамай, кәрәк нәмәләрҙе йыйып, поезд артынан сыҡтыҡ. Балаҡайыбыҙҙы Самараланың госпиталгә алып килделәр. Ул күп ҡан юғалтҡайны. Унның тубығына операция эшләнеләр, бер нисә ярсыҡты алдылар. Һуңынан Өфөгә ҡайтты. Оҙаҡ та тормай, ул тағы ла фронтҡа китте. Разведкала хеҙмәт итә башланы. Балаҡайым 19 майҙа дүрт егет менән бергә хәрби заданиеға сыға. 23 майҙа үлеп ҡала, дүртәүһе лә...

Ә бит 23 майҙа уның йәне мин йоҡлаған бүлмәгә килде. Ҡапыл ғына елдең елпеүенә күҙҙәремде асһам, минең эргәмдә ул баҫып тора. Тороп ултырғайным, юҡҡа сыҡты. Шуға, балағынамдың йәне 23 майҙа ауылға ҡайтты, тип тел әйтәм. Йән дә ҡайта бит. Васыят итеп әйткәненсә, уны өләсәһе эргәһенә ерләнек. Әле бына мәктәптә "Герой партаһы" астыҡ. "Әгәр ҙә мин һуғышҡа инмәһәм, нацистар бит беҙгә килеп етәсәк", - ти торғайны балаҡайым. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыуы менән шул ҡәҙәр ғорурланды. Унның кеүек тә матур бала булмай бит ул...

- Улым һәр ваҡыт йәҙел, батыр, ҡыйыу, ижади ҡарашлы булды, - тине Марселдың атаһы Фирғәт Сәхиулла улы ла. - Бала саҡтан Ватан һаҡсыһы, ғәҙеллек яҡлы булырға тырышты. Теләге тормошҡа ашты балаҡайымдың. Ләкин унның өсөн ул ғүмерен бирҙе...

**Лилиә ТАКАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

---

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Кесерткән турғайы

**(Крапивник)**



Кесерткән турғайы ғаиләһенә ҡараған ваҡ, әммә етеҙ, хәрәкәтсән был ҡоштарҙы өҫкә күтәрелеп торған ҡойроғонан танырға була. Ҡанаттары киң, ҡыҫҡа, ерҙең, һыуҙың өҫтөнән генә осоп йөрөй. Оялары - ваҡ сыбыҡтарҙан, мүктән, ботаҡтарҙан торған шар, инеп-сығып йөрөү урыны ҡабырғаһында урынлашҡан. Уларҙың иң билдәле төрө - кесерткән турғайы турғайҙан ике тапҡырға ваҡыраҡ. Каштан төҫөндә, ҡара буй-буй һыҙаттары бар, кәүҙәһенең аҫҡы өлөшө асығыраҡ. Ҡыҫҡа ҡойроғо өҫкә ҡарап тора. Урманда, ҡыуаҡлыҡтарҙа осратырға мөмкин. Ҡошсоҡ тамыр төптәрен, өйөлөп ятҡан ботаҡтарҙың аҫтарын "тикшерергә" ярата. "Тик-трик-тик" тип ҡысҡырып, оса-ҡуна йөрөй. Ҡурҡҡан мәлендә "сырр-сырр" тип тауышлана. Йыры матур, йыраҡҡа ишетелә.

Рәсәйҙең Европа өлөшөндәге ареалының көнсығыш сиге Волгаға килеп етә. Башҡортостанда һирәк осрай. Уны ҡайһы бер йылдарҙа Ҡауарҙы ауылындағы йәйге баҡсала (Ғафури районы), Өфөнөң Еңеү паркында, шулай уҡ яҙғы-көҙгө осорҙа Ғафури исемендәге паркта, Ботаника баҡсаһында, йәмәғәт транспортының "Тирмән комбинаты" туҡталышы эргәһендә, 1966 йылдың 2 октябрендә Бөрө районының Шишмә ауылы янындағы урман йылғаһы буйындағы кесерткәнлектә, ә 2001 йылдың авгусы башында ошо районда Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә, 2002 йылдың йәйендә Баймаҡ районы Комсомол ауылы эргәһендәге исемһеҙ йылға буйында күрергә мөмкин булды.

Ырымбур өлкәһендә 1999 йылдың 7 ноябрендә кесерткән турғайы Беляевка районының Междуречье ауылы янында Урта Бүртә йылғаһы (Яйыҡтың ҡушылдығы) буйында күренгән. Бынан тыш, ошо уҡ йылдың октябрендә 5 кесерткән турғайынан торған төркөм Янтарное ауылынан 5 саҡрым тирәһе йыраҡлыҡта Бәләкәй Уран (Һаҡмар йылғаһы ҡушылдығы) йылғаһының ярында осраған.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



## 9 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Соломенная шляпка". [0+]
8.45 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [12+]
10.15 Д/ф Премьера. "И не надо зря портить нервы". К 100-летию Александра Зацепина. [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.25 "Эхо любви" Роберта Рождественского. [12+]
15.20 Д/ф Премьера. "Антон Хабаров. Под маской Казановы". [12+]
16.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при России. Трансляция из Челябинска. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Казанова. Возвращение". [16+]
23.00 Д/ф Премьера. "Лайза Миннелли: Невероятная, но правдивая история". К юбилею великой актрисы. [18+]
1.00, 1.40, 2.25, 3.00, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
7.35 Большой праздничный концерт "О чем поют 8 марта".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Х/ф "Служебный роман". [12+]
14.45 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
23.45 Большой концерт к 50-летию Юрия Шатунова.
1.45 Х/ф "Любимые женщины Казановы". [12+]
4.10 Т/с "Девочки не плачут". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 21.00, 23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**9.00 Детей много не бывает. [6+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Детский концерт "Мамин праздник". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.45 Гора новостей.**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Концерт Рима Хасанова. [12+]**
**14.00 Спектакль "Цена счастья". [12+]**
**17.00 Церемония награждения Республиканского конкурса "Образцовая башкирская семья-2026". [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Концерт Гульдар Ишкуватовой.**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Вот это любовь". [16+]**
**1.45 Спектакль "Деревья умирают стоя". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 10 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 11.50, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при России. Трансляция из Челябинска. [0+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. Возвращение". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.15, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.45, 23.50 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 "Век Зацепина". Большой юбилейный вечер к столетию Александра Зацепина. Прямая трансляция из Большого театра.
1.20 Х/ф "Свадьбы не будет". [12+]
3.05, 4.00 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 "Автограф". [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Формула здоровья. [12+]**
**18.15 Материнство и детство. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Репортаж с юбилея Уфимской башкирской гимназии № 20 им.Ф.Мустафиной. [6+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Д/ф "Тауба". [12+]**
**23.45 Письма солдатам. [12+]**
**0.00 Х/ф "Счастливые дни". [16+]**
**1.45 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 11 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. Возвращение". [16+]
0.05, 0.50, 1.30, 2.05, 2.40, 3.05, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.45, 3.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Мамонты". [16+]
23.55 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 "География вкуса". [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Формула здоровья. [12+]**
**17.00 Преображение. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2026". [12+]**
**0.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). (. [12+]**
**2.00 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**3.30 Д/ф О чем говорят Памятники. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 12 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. Возвращение". [16+]
0.05, 0.50, 1.30, 2.05, 2.40, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.45, 3.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Мамонты". [16+]
23.55 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Специальный репортаж. [12+]**
**16.15 Полезные новости. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Должок". [16+]**
**1.45 Спектакль "Ак калфак". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 13 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.55 Х/ф Премьера. "Поцелуй". По мотивам романа Стефана Цвейга. [16+]
1.50, 2.30, 3.05, 3.40, 4.20, 4.55, 5.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Мамонты". [16+]
0.05 Истории Большой Страны. [12+]
1.55 Х/ф "Ради твоего счастья". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45 Дознание. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). КХЛ.**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). [12+]**
**2.00 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!" [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 14 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Хочется праздника". [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.15 Д/ф "Самая-самая". К юбилею Ирины Алферовой". [12+]
14.20 Х/ф "С любимыми не расставайтесь". [12+]
15.50 Премьера. "Наше всё. Сделано в России". [12+]
16.45 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Ледниковый период". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.55 Х/ф "Жила-была одна баба". К 85-летию Андрея Смирнова". [18+]
2.30, 3.10, 3.45, 4.25, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Парад юмора. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Я буду жить у папы". [16+]
0.55 Х/ф "Ненавижу". [16+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Генералы Башкортостана. [12+]**
**8.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 "Елкән". [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Церемония награждения Республиканского конкурса "Образцовая башкирская семья-2026". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 "Байык-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башкорт йыры представляет". [12+]**
**0.45 Х/ф "Координаты неизвестны". [12+]**
**2.30 Спектакль "Печаль моя светла". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 15 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.15 Х/ф "Петровка, 38". К 100-летию со дня рождения Георгия Юматова". [12+]
15.05 Х/ф "Огарева, 6". [12+]
16.50 Д/ф Премьера. "Георгий Юматов. Амнистия для героя". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "ДОстояние РЕспублики". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 Д/ф "Влад Листьев. Улыбка на память". [12+]
1.05, 1.40, 2.20, 3.00, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.20, 1.40 Х/ф "Синдром недосказанности". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Веселые ребята. [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.22 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Полезные новости. [12+]**
**8.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.00 Материнство и детство. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Шанхайские Драконы". КХЛ.**
**19.00 Д/ф "Жить..." [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Ап-асык. [16+]**
**23.00 Х/ф "Король неба". [16+]**
**1.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Шанхайские Драконы". [12+]**
**3.15 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1447 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ахшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (20) дүшәмбе | 5:46 | 6:00 | 7:46 | 13:30 | 17:07 | 19:05 | 20:44 |
| 10 (21) шишәмбе | 5:43 | 5:58 | 7:44 | 13:30 | 17:09 | 19:07 | 20:46 |
| 11 (22) шаршамбы | 5:40 | 5:55 | 7:41 | 13:30 | 17:10 | 19:09 | 20:48 |
| 12 (23) кесе йома | 5:38 | 5:52 | 7:39 | 13:30 | 17:12 | 19:11 | 20:50 |
| 13 (24) йома | 5:35 | 5:50 | 7:36 | 13:30 | 17:14 | 19:13 | 20:52 |
| 14 (25) шәмбе | 5:32 | 5:47 | 7:34 | 13:30 | 17:15 | 19:15 | 20:54 |
| 15 (26) йәкшәмбе | 5:29 | 5:44 | 7:31 | 13:30 | 17:17 | 19:17 | 20:57 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*





БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 8 МАРТ - ХАЛЫҠ-АРА ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР КӨНӨ МЕНӘН!

## Яҙ - ҡатын-ҡыҙ

*Яҙ - ҡатын-ҡыҙ!*
*Шаталаҡ ҡыҙ -*
*Селтер-селтер,*
*Йырғанаҡтар булып көлгән,*
*Муйынына ялтыр-йолтор*
*Селтәр-мәрйен теҙеп-*
*теҙгән…*

*Яҙ- ҡатын-ҡыҙ!*
*Шаян ҡатын -*
*Селтәр шәлен ябынған да*
*Шат ҡояшҡа күҙен ҡыҫа,*
*Ҡолағына тамсы-алҡа,*
*Сәстәренә боҙбармаҡтан*
*Йәйғор-тараҡ тағылған да!*
*Яҙ - ҡатын-ҡыҙ!*
*Көләс әбей -*
*Ер-арҡаһын*
*Көнгә ҡуйып иҙерәткән,*
*Аҡ йөҙөндә юлаҡ һырҙар…*
*Гөрләүектәй гөрләп кенә,*
*Ғүмер ебен иләп кенә,*
*Нур-йомғағын тәгәрәткән.*

*Яҙ - ҡатын-ҡыҙ!*
*Егет-ҡыштың,*
*Ир-уҙаман, олпат ҡарттың,*
*Ҡосағына бер һыйынып,*
*Бер ысҡынып,*
*Бер йылынып,*
*Көлә-илай,*
*Илай - көлә*
*Йәшлегенә ҡабат ҡайта…*
*Яҙ һәм Һөйөү никахына*
*Ел-уҙаман уҡый бата!*

**Лилиә ҺАҠМАР.**






**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**8-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бабич. Ҡатыҡ. Аршын. Илһам. Кәрим. Ишәй. Си. Мәмерйә. Туҡай. Кимоно. Раиса. Ата. Юлаев. Таяҡ. Аҡыҡ. Һыйыр. Ван. Вары. Ашуғ. Ленин. Аҡмулла. Аксиома.

**Вертикаль буйынса:** Матросов. Исмәғилев. Рамаҙан. Ҡама. Анкара. Миәкә. Бутҡа. Арҡау. Ғафури. Шайморатов. Айгөл. Сабан. Аша. Кит. Юҡһыл. Урал. Алле. Май. Варан.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 март "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+
**7 март "Ҡыҙ урлау"** (М.Кәрим, И.Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+
**8 март "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+
**9 март "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+
**11 март "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова). 16+
**12 март "Урал батыр"** (А. Борисов), башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский, Р. Хәкимов), мюзикл. 11:00. 0+
**6 март "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләзов, Ф. Ғәрипов), драма. 19:00. 12+
**7 март "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хакимов), фэнтези. 12:00. 6+
**7 март "Мәйсәрә мутлыҡтары"** (Х. Ниязи, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 18:00. 16+
**8 март "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Күлбаев), әкиәт. 12:00. 0+
**8 март "Седина в бороду или невеста из Имеретии…"** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 18:00. 12+
**10 март "Две Бабы-яги"** (М. Күлбаев), әкиәт. 11:00. 0+
**11 март "Брат Чичиков"** (Н. Гоголь, М. Күлбаев), сатирик комедия. 19:00. 12+
**12 март "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов, Р. Хәкимов), фэнтези. 11:00. 6+
**12 март "Дейеүкәй"** (С. Лебо, А. Абушахманов). 19:00. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6 март "Любовное приключение"** (В.Аношкин). 19:00. 18+
**7 март "Буратино"** (А.Толстой). 12:00 һәм 15:00. 0+
**7 март "Ҡар бабай һәм ҡояшҡай"** ( А. Малахов). 11:00. 0+
**7 март "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 14:00. 0+
**8 март "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 12:00 һәм 15:00. 0+
**8 март "Коллекция смеха"** (О.Куценко). 18:00. 16+
**9 март "Вот так репка!"** ( И. Токмакова). 12:00 һәм 15:00. 0+
**12 март "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 март "Поговори со мною, мама"** Татьяна Никанорова (меццо-сопрано), Анна Маркова (фортепиано), концерт. 12+
**10 март "Классика над Белой рекой"** VIII Бөтә Рәсәй камера музыкаһы фестивале сиктәрендә Лев Франк (фортепиано) концерты. 12+
**11 март "Зазвучи"** яҙыусы, блогер Ольга Савельеваның моноспектакле. 16+
**12 март "VIVA, SAUER!"** Өфө органына 40 йыл айҡанлы концерт. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**6 март "Әсәй, бына һиңә килен…дәр"** (И.Зәйниев, А.Зарипов), комедия. 12+
**8 март "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н.Ғәйетбаев), комедия. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**10 март Иҙел Нурғәлиндың** концерты. 6+

### БР Милли музейы

**6 март "Образ башкирской женщины"** тематик экскурсияһы. 12:00. 12+
**7 март "Чеканка"** оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+
**8 март "Весенний комплимент"** тематик экскурсияһы. 15:00. 12+
**12 март "Халҡым моңо"** мәҙәни-ағартыу экскурсияһы. 15:00. 6+
**12 март "Жизнь как археологическая симфония"** экскурсияһы. 16:00. 12+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ӘРТИСЛЕККӘ УҠЫТАЛАР



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры директоры Зиннур Сөләймәнов Өфөләге башҡорт мәктәптәренең сығарылыш уҡыусылары менән осрашты.**

Буласаҡ студенттар менән әңгәмә һөнәр һайлау, әҙәбиәт һәм гуманитар белемдең әһәмиәте темаһына ҡоролдо, шулай уҡ йәштәр өсөн театр өлкәһе тәҡдим иткән мөмкинлектәр телгә алынды. Осрашыу барышында уҡыусыларҙы актер һөнәренең бөгөнгө талаптары, классик һәм милли драматургия төшөнсәләре менән таныштырҙы, мәктәптән профессиональ сәхнәгәсә юл үҙенсәлектәре хаҡында һөйләне. Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында Башдрамтеатр өсөн асыласаҡ махсус курстың киләсәктә театр актерына уҡырға теләгәндәр өсөн шәп мөмкинлек булыуын әйтте. М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры өсөн әҙерләнәсәк актерҙарҙың уҡыу процесы республиканың төп милли театры сәхнәһендәге практика менән ҡатнаш бара.

"Башҡорт академия драма театры - бер быуатлыҡ тарихҡа эйә юғары профессиональ театрҙарҙың береһе. Уның өсөн яңы быуын актерҙар әҙерләүҙә лә заман талаптарына ярашлы, төплө ойоштороу яҡлыбыҙ", - тип билдәләне М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры директоры Зиннур Сөләймәнов. Шулай уҡ тупланасаҡ махсус курстың милли кадрҙар әҙерләүҙә мөһим аҙым һәм йәштәргә юғары белемде Башҡортостанда алыу мөмкинлеге икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

# ӘЛИФБА ЙӘНҺҮРӘТЕ



**Башҡортостанда "Әлифба: ваҡыт һәм һандар" анимациялы белем биреү-күңел асыу проектының икенсе миҙгелен төшөрөү тамамланды.**

Икенсе миҙгел кескәй тамашасыларҙы цифрҙар, һуңынан һандар (10, 100, 1000 һ.б.), ваҡыт төшөнсәләре (тәүлек, сәғәт, секунд һ. б.), йыл миҙгелдәре (көҙ, ҡыш, йәй, яҙ) һәм, ниһайәт, йылдың һәр айы менән айырым таныштыра. Киностудияның матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, проект 3-7 йәшкә тиклемге балаларға башҡорт теленең нигеҙҙәрен үҙләштереүҙә ярҙам итә. Йәнһүрәт сабыйҙарҙы туған телгә өйрәтеүсе ата-әсәләр өсөн, шулай уҡ балалар баҡсаларында һәм мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында күрһәтеү өсөн төшөрөлгән. Ул 60 сериянан тора. Һәр сығарылыш өҫтөндә, сценарий яҙыусыларҙан һәм рәссамдарҙан тыш, балалар психологтары, музыканттар һәм башҡорт теле уҡытыусылары эшләгән. Йәнһүрәт рәссам-карикатурист Камил Бузыҡаев һәм Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы булышлығында "Муха" студияһында төшөрөлгән. "Әлифба" проектының беренсе миҙгеле башҡорт алфавиты хәрефтәре тураһында ине. Проект Башҡортостан Башлығы гранттары фонды аҡсаһына ғәмәлгә ашырыла.

# ЭПОСЫБЫҘ - СИТ ИЛ СӘХНӘЛӘРЕНДӘ

**AY YOLA төркөмө Азияның иң ҙур мәҙәни-спорт ваҡиғаһы - 2026 йылғы Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарының амбассадоры исеменә лайыҡ булды.**

31 августан 6 сентябргә тиклем Ҡырғыҙстанда Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындары ойоштоола. Был сара күсмә халыҡтарҙың спортын, мәҙәниәтен һәм матди булмаған мирасын берләштерә, унда бар донъянан меңләгән ҡунаҡ ҡатнаша. "Музыка, мәҙәниәт, дөйөм ритм аша беҙ был ҙур халыҡ-ара юлдың бер өлөшө булыуыбыҙға шатбыҙ, - ти музыканттар. - Беҙҙең ижадыбыҙ буронғо "Урал батыр" эпосына нигеҙләнгән. Музыка аша башҡорт мәҙәниәте ҡиммәттәре, ата-бабалар хәтере һәм кешенең ер менән бәйләнеше хаҡында һөйләйбеҙ. Беҙҙең өсөн был образ да, стилизация ла түгел, ә бөгөнгө көндә лә яңғыраған йәнле традиция".

Быуаттар буйына телдән-телгә күсеп килгән "Урал батыр" эпосы тәүгә тапҡыр Европа сәхнәләрендә яңғырай. Әле AY YOLA төркөмө Европа буйлап турнеға юлланды. "Беҙ был илдәргә ысын тауыш алып киләбеҙ: ҡурай, думбыра, ҡумыҙ. Шулай уҡ Башҡортостан ерендә тыуған тарих менән таныштырабыҙ", - тип белдерҙеләр төркөмдә.

# ЗӘЙНЕТДИН КОНЦЕРТ ҠУЙҒАН

**Башҡортостандың халыҡ артисы, музыкант-мультиинструменталист, Zainetdin этно-шоуы проекты солисы Зәһир Зәйнетдинов һәм башҡорт эстрадаһы артисы Альбина Килдейәрова "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы яугирҙары алдында сығыш яһаны.**

Улар менән бергә хәрби хеҙмәткәрҙәр ҙә сәхнәгә күтәрелде. Ижадташ дуҫтары һәм хәрби иптәштәре алдында Ҡариҙел районы егете, күп һанлы республика һәм төбәк-ара конкурстар лауреаты, 2023 йылдың көҙөндә Оборона министрлығы менән контракт төҙөгән "Йырсы" позывнойлы яугирҙың сығыш яһауы бигерәк тә тулҡынландырғыс булды. Уның менән бергә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының һөйләү жанры артисы Эльмира Юлдашева ла ижады менән ҡыуандырҙы. Популяр артистар менән бергә яугирҙарға "Ете ҡыҙ" йәмәғәт ойошмаһы ирекмәндәре лә килгәйне. Волонтерҙар яҡташтарына республика райондарында һәм Силәбе өлкәһендә йыйылған гуманитар ярҙам, күстәнәстәр һәм посылкалар килтерҙе.

# ҠЫҘЫҠЛЫ ВАҠИҒА БУЛЫР

**Легендар "Һинд легендаһы" спектакленең Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры сәхнәһенә яңынан ҡайтыуы 2026 йылдың ҡыҙыҡлы мәҙәни ваҡиғаһы булмаҡсы. Премьера яҙғыһын көтөлә, спектаклдең режиссеры - Ольга Шәрәфетдинова.**

Һиндтарҙың боронғо "Рамаяна" эпосы буйынса "Һинд легендаһы" спектакле Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры сәхнәһендә тәүгә тапҡыр 1987 йылда (ул саҡта баш режиссер Павел Мельниченко була) ҡуйыла. Спектаклдең художестволы биҙәлеше менән билдәле рәссам Наил Байбурин шөғөлләнә. Был спектакль Һиндостанда өс тапҡыр күрһәтелә.

"Был спектаклдә хаҡлы рәүештә тотош республиканың ғорурлығы тип әйтергә мөмкин: ул Башҡорт ҡурсаҡ театрына Һиндостандың Джавахарлал Неру исемендәге дәүләт премияһын алырға ярҙам итә. Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры бөгөн дә Рәсәйҙә ошо абруйлы награданы алған берҙән-бер театр булып ҡала", - тип белдерҙеләр театрҙың матбуғат хеҙмәтендә.

# БЫЛ ЙЫРҘЫ КЕМ ЯҘҒАН?

**Өфөлә "Шайморатов генерал" йырының авторы тураһында "Кадир Даян" документаль нәфис фильмының исем туйы була.**

Фильм башҡорт шағиры, яҙыусы, драматург, мөхәррир Ҡадир Даянға арналған (1910-1975). Шағирҙар һәм поэмалар авторы, шағир-йырсы булараҡ билдәле. Тамашасылар уның Башҡорт драма театрында ҡуйылған "Таңсулпан" пьесаһын да яратып ҡараны. Фильм Башҡортостандың Милли әҙәби музейы фонды материалдары буйынса төшөрөлгән. Режиссерҙары - Гөлсәсәк Саламатова һәм Азат Низаметдинов.

"Был фильм һеҙгә үлемһеҙ йырҙар авторы донъяһына, шул иҫәптән "Шайморатов генерал"ға ишек асыр. Фильмда республикала билдәле артистар ҙа, кескәй йондоҙсоҡтар ҙа төшкән. Уның авторҙары заманса цифрлы реконструкция ысулдары һәм һәлмә зиһен ярҙамында уҙған йылдар мөхитен тыуҙырырға тырышты", - тип хәбәр итә сараны ойоштороусылар.

Исем туйы Башҡортостандың "Йәшлек" йәштәр йортонон конференциялар залында була. 6+

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХӘТЕРҺЕҘҘЕҢ ХӘТЕРЕН...

## кәҙә ашаған

Һыйыр майы - һары май, һыйыр көткән арымай; кәҙә майы - туң май, кәҙә көткән уңмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Сәнғәт - ул кеше өсөн һыу һәм аҙыҡ кеүек үк кәрәк нимә. Кеше теләйме, юҡмы, ижад һәм матурлыҡһыҙ йәшәй алмай.

**(Ф. Достоевский).**

Бәхет - ул үҙ яҙмышыңа күнеү һәм тормоштағы хәлең менән ҡәнәғәт булыу.

**(Эразм Роттердамский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡалға илауҙан шешенеп бөткән матур ҡыҙ мөрәжәғәт итә. "Миңә нимә эшләргә икән? - ти ул. - Мин кешеләргә изгелекле булырға, берәүҙе лә рәнйетмәҫкә, ярҙам итергә, матур мөғәмәләлә булырға тырышам. Ләкин рәхмәт һәм хөрмәт урынына кешеләрҙән мыҫҡыллау һәм әрләү һүҙҙәре генә ишетәм. Кемдәрелер мине хатта дошман күрә. Ни эшләргә миңә - кәңәш бирегеҙ, зинһар!"**

**Аҡһаҡал ҡыҙға һынаулы ҡарап тора ла, йылмайып: "Сыр яланғас сисен дә, ҡала урамы буйлап шулай йөрөп ят, әйҙә", - ти. "Һеҙ аҡылдан шаштығыҙмы әллә? - тип ҡысҡырып ебәрә ҡыҙ. - Ул саҡта халыҡ мине бөтөнләй өҙгөләп ташлаясаҡ, Хоҙай ҙа өнәмәйәсәк бындай ҡылыҡты!"**

**Шул саҡта аҡһаҡал ҡыҙға ҡарап һүҙ башлай: "Бына, күрәһеңме, халыҡ араһына яланғас тән менән сығырға ҡурҡаһың. Ә ниңә һин халыҡ алдында күңелеңде яланғасландырып йөрөйһөң улай булғас? Күңелең бит ишек кеүек шар асыҡ. Шуның өсөн унда барыһы ла бер ниндәй рөхсәт һорап тормай барып инә. Улар һиндә үҙҙәрендә булмаған сифаттарҙы күрә лә, һине түбәнһетергә, мыҫҡылларға тотона, сөнки берәү ҙә үҙенең етешһеҙлеген танырға, уны төҙәтә һалырға теләмәй. Төҙәлергә теләмәгән өсөн дә яҡшы фиғелле кешеләр менән бәхәскә инергә, талашырға ярата..."**

**"Улайһа, миңә ни эшләргә һуң?" - ти ҡыҙ. "Әйҙә, мин һиңә үҙемдең баҡсамды күрһәтәм", - ти аҡһаҡал һәм ҡыҙҙы баҡсаһына алып китә.**

**Баҡса буйлап йөрөгәндә, сәскәләр эргәһендә туҡтап, шулай ти: "Ошо матур сәскәләрҙе мин күп йылдар тәрбиәләп үҫтерәм, һыу һибәм. Әммә минең бер тапҡыр ҙа уларҙың сәскә булып асылған мәлен күргәнем булманы... Һин дә сәскә һымаҡ бул: күңелеңде кешеләргә күрһәтмәй, ашыҡмай, һиҙҙермәй генә ас. Кемгәләр асылыр алдынан тәүҙә ул кешенең яҡшымы, изгелеклеме, һиңә лайыҡлымы икәнен ҡара, ә инде күңелеңдең нескә ептәрен өҙөргә һәм аяҡ аҫтына һалып тапарға әҙер әҙәмдәрҙән ҡас. Тормошоңа һәр кемде лә индермә, ә тупаҫ һәм игелекһеҙҙәрҙе, ғөмүмән, ябыҡ ишек артында тотоу хәйерле..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 05.03.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 05.03.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 06.03.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2677
Заказ - 402